✓ *Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.*

*(Андре Жид).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№40 (406)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Беҙҙең төбәктең белем усағы



2

Йолаларҙы тергеҙергә... өлкәндәрҙең дәрте кәрәк



5

Нәсихәт кенә һөйләмә, яҡшы өлгөнө үҙең күрһәт



7

Бал ҡортобоҙ, балыбыҙ, атыбыҙ, ҡымыҙыбыҙ...

Уларҙы һаҡлау үҙебеҙҙе лә һаҡлау буласаҡ





8-9, 11

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Башҡорт ғаиләһендәге башҡортлоҡ нимәлә сағылырға тейеш: милли кейем кейеүҙәме, ете быуын шәжәрәңде белеүҙәме, әллә туған телдә һөйләшкән балалар тәрбиәләүҙәме?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ:** Милли тәрбиә, башҡортлоҡ ата-әсәнән, ғаиләнән башланыуы билдәле. Бөгөнгө болғансыҡ заманда, йәштәр араһында милли рух абруйы ниндәйҙер кимәлдә төшә килгәндә, балаларыбыҙ араһында ғаилә культын, ундағы башҡортлоҡ мөхитен популярлаштырыу мөһим.

Милли кейемгә килгәндә, тәү сиратта, ул йәмғиәт күҙаллауынан тора. Әгәр ҙә иртәгә башҡортомдоң һәр бер вәкиленә милли кейем кейеп йәшәргә тигән тәҡдим булһа, тәү булып кейенеп алыр инем. Әлегә түбәтәй кейеп йөрөүҙе сәләмләр инем.

Мин үҙем, ейәндәремде ҡушып һанағанда, 14 быуын шәжәрәмде беләм. Ата-бабаларымдың быуынын, тамырын белеүҙе милләтемдең шанлы тарихын хөрмәт итеү, уның менән ғорурланыу тип ҡабул итәм. Табип күҙлегенән сығып һүҙ йөрөткәндә, шәжәрәне белеү тормошта булып торған ябай ваҡиғаларға рациональ ҡарарға мөмкинлек бирә.

Әсә телен белеү мотлаҡ, сөнки тел кеше өсөн туған халҡының мәҙәниәтен, тарихын, ысынбарлығын белеү сығанағы, ҡоралы. Ни тиһәк тә, бөгөнгө йәштәргә тел өйрәнеүе еңелгә тура килә, вайымһыҙ ғына булмаһындар. Мин ғаиләмдә балаларыма, ейәндәремә телгә ҡарата ғорурлыҡ тәрбиәләй алдым, тип иҫәпләйем.

**Илдар БУРАНҠАЕВ:** Мин үҙем һигеҙ йыл буйы рус мәктәбендә уҡыным. Рәхмәт Өфөләге 1-се мәктәп-интернатыма - үҙ телемде ошонда өйрәндем. Әммә русса уйлап-фекерләп, башҡортса тәржемә итеп һөйләшеү ауырыраҡ. Бының менән ни әйтергә теләйем: бала үҙ булмышын ғаилә мөхитендә ала. Балаларың менән башҡортса һөйләшһәң, эргәләрендә уларҙы тәрбиәләүҙә үҙ йоғонтоһон яһаған өләсәләре булһа, башҡортлоҡ шунан килә лә инде.

Мин үҙем халҡыбыҙҙың милли кейемен яратам. Шулай бер ҡәйнешемдең туйында, ҡатыным менән ҡәйенбикәм риза булмаһа ла, бажайым менән генә һөйләштем дә, милли кейем кейеп сыҡтым һәм ҡурайҙа уйнап ебәрҙем. Беләһегеҙме, барыһы ла шым ҡалып тыңланы. Ырымбур өлкәһенән килгән бер ҡоҙа, рәхмәт әйтеп, мине ҡосаҡлап алды ла, илап ебәрҙе. Бына ни эшләй ул милли йыр-моң - уны тыңлағанда үҙең дә һиҙмәҫтән булмышыңа ҡайтаһың да ҡуяһың.

Үҙ шәжәрәңде белеү һәр кемгә лә мотлаҡ. Мин иһә шәжәрәмде яҡшы беләм. Ете быуынға тиклем яҙып алынған. Үҙ тәжрибәмдән сығып, балаларымды - ике улым менән ҡыҙымды, тырышып-тырышып башҡортса өйрәттем, башҡорт итеп тәрбиәләргә тырыштым. Улдарым ҡурайҙа уйнай, ҡыҙым башҡортса бейергә ярата.

**Марат ХАФИЗОВ:** Башҡортлоҡ - ул кешенең милли рухы, теле, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын белеү һәм үтәү, үҙ ырыуын һәм уның тарихын өйрәнеү, шәжәрәһен төҙөү. Мин үҙем дә, ғаиләм дә ошоларҙың барыһын да үтәргә тырышабыҙ, алты быуыныбыҙҙы яҡшы беләбеҙ - шәжәрәбеҙ төҙөлгән. Ул яҡтан улым да, ҡыҙым да йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтерерлек түгел. Ейәнейәнсәремде лә үҙ юҫығыбыҙҙа тәрбиәләргә тырышабыҙ.

Милли кейем тураһында һүҙ алып барғанда, мин үҙем ата-бабаларыбыҙҙың кейемдәрен сәнғәт әҫәрелəй күрәм һәм ғашиҡмын, уларҙы йәмәғәтселек алдына кейеп сығыуҙан баш тартмаҫ инем.

## ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ДӘҮЛӘТ ГЕРБЫНДА...

## изге ынтылыштарыбыҙ

**Рәссамдар араһында Башҡортостан Республикаһы Гербын эшләргә конкурс иғлан ителгәс, был эшкә айырыуса сәмләнеп, илһамланып тотондом. Минең күҙ алдына ул тәүҙә үк шундай булып кәүҙәләнде: Дәүләт гербында мотлаҡ башҡорт халҡының тарихын, уның рухи донъяһын сағылдырған төп элементтар урын алырға тейеш.**

Ә уларҙы нимәләр кәүҙәләндерә һуң? Әлбиттә, башҡорт халҡының быуаттан-быуатҡа күсә килгән изге ынтылышы - ирек, ғәҙеллек һәм азатлыҡ һөйөүе, уның өсөн көрәше, ә рухи донъяһы: яуҙа - яуҙаш, юлда - юлдаш, ғәҙәти тормошонда мондашы булған ете тажлы ҡурайы! Азатлыҡ һәм ирек өсөн көрәштә батырҙарыбыҙ, шөкөр, күп булған, ә бына уларҙың бөтәһенең сифаттарын дөйөмләштереп, үҙендә уларҙың образһыҙаттырын бергә туплаусы батырҙарҙан батырыбыҙ - ул, әлбиттә, Салауат Юлаев. Милли геройыбыҙ башҡорттоң ирек юлында баш һалған башҡа бик күп батырҙарының ҡаһарманлыҡтарын да ҡабатлай, шул уҡ ваҡытта тыуған иле, ғәзиз Уралын данлаусы шағир-импровизатор ҙа. Тимәк, Салауатыбыҙ образын һынландырыусы һыбайлы һәйкәл урын алырға тейеш гербта, тип уйланым мин. Салауатҡа һәйкәл - ул аныҡ бер шәхестеке генә түгел, ә көрәшсе батырҙарыбыҙҙың дөйөмләштерелгән образы, Башҡортостандағы күп милләтле халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ символы ла бит ул.




Бына шулай тыуҙы миндә Герб идеяһы. Эскиздар тәүҙә "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыҡты. Күп һанлы гәзит уҡыусыларға ла иң уңышлы тип табылған эштәрҙе һайлап алыу форсаты бирелде. Минең эскиз ҡалҡып килгән ҡояш нурҙары фонында Салауат Юлаев һәйкәле һүрәтләнеше, аҫтараҡ ете тажлы ҡурай һәм республикабыҙ флагы төҫөндәге таҫма. Аҡ һыҙат өҫтөнә "Башҡортостан" тип яҙылған.

Ҡырҡ бишләп эш араһынан минең эскиз һайланып алыныуы менән бәйле хистәрҙе әйтеп тә аңлатырлыҡ түгел, әлбиттә. Ғорурлыҡ та, бик ныҡ тулҡынланыу ҙа кисерәм әле булһа. 1993 йылдың октябрендә парламент сессияһы мин эшләгән Герб проектын ҡарауға сығарҙы һәм раҫланы. Яңы Башҡортостаныбыҙҙың Дәүләт символикаһын ҡабул итеү, шулай итеп, республикабыҙ суверенитет яулап алғас ҡына мөмкин булды.

**Фазлетдин ИСЛАХОВ,**

**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР Дәүләт гербы авторы.**

ИШАРА

# ҮҘ ФЕКЕРЕҢ ӨСӨН... ҡурҡырға кәрәкме?

**Өсөнсө курста уҡып йөрөгәндә, ниңәлер, "Композиция" дәресе урынына "Керамика сәнғәтенең тарихы" дәресе үтәсәк, тип иғлан иттеләр. Бына дәрес башланды. Тыңлайым, тыңлайым, яңылыҡ ишетмәйем. Ҡулымды күтәреп, һүҙ һораным да: "Зоя Сергеевна, был теманы күптән түгел генә үткәйнек бит", - тип әйттем дә ҡуйҙым. Бер нисә студент ҡысҡырып көлөп ҡуйҙы. Уҡытыусы: "Кабатлап тыңлау ҡамасауламаҫ, тиҙҙән имтихан бит", - тип кенә әйткәйне, тәнәфескә ҡыңғырау шылтыраны.**

Аудиторияла IV курс студенттары менән бергә дәрес үтә инек. Уҡытыусы сығып киткәс, бер IV курс студенты: "Нинә үҙ фекереңде әйттең инде? Имтиханда икеле сәпәйәсәк, әҙер бул", - тип, мине йәллән иҫкәртеп ҡуйҙы. Һабаҡташым Татьяна: "Һәр саҡ үҙ фекереңде әйтмәй ҡуймайһың. Бөтәһе лә өндәшмәй түҙә бит", - тип шелтәләне. "Эх, Таня, композицияға әҙерләнеп килгәйнем шул. Ижади уйҙар саф сағында үҙ гүзәллегенә эйә бит. Ә ваҡыт үткәс, нисектер, тоноҡлана, төҫһеҙләнә. Үҙең дә тойғаның барҙыр", - тип аҡландым.

Бына имтихандар етте. Уҡытыусының ҡаршыһына ултырып, билеттағы һорауҙарға яуап бирәм. Уҡытыусы зачеткамдың биттәрен ҡараштырҙы ла: "Бөтә фәндәрҙән дә "4", "5" билдәләре, "Керамика сәнғәтенең тарихы"нан түбән билдә булыуы сәйер күренеш түгелме?" - тип әйтте лә, "бишле" билдәһен ҡуйҙы. Ә уҡыу йортон тамамлау кисәһендә ул минең янымa килде һәм: "Мәскәүгә юлың төшһә, бына визиткам, беҙҙә туҡтарһың. Фатирыбыҙ иркен..." - тип, уң битемдән үбеп алды...

Совет осорондағы ошондай төрлө ваҡиғалар иҫкә төшә лә, "Ә әле?" тигән һорау ҡалҡа ла сыға. Булып үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында үҙ фекеребеҙҙе тура ярып, асыҡ итеп әйткәйнек, Үҙәктән йоҙроҡ күрһәттеләр түгелме? "Ҙур ғаиләлә төрлө хәлдәр була инде..." тип, үпкәне онотоорға тырышһам да, урыҫтың: "Обида прошла, но осадок остался", тигән әйтеме әлеге хәлемә, күңел торошома тап килә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# БЕҘҘЕҢ ТӨБӘКТЕҢ БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Көньяҡ Урал районлары өсөн Сибай ҡалаһында юғары уҡыу йорто асыу ихтыяжы элек-электән булды. Өфөнән был яҡҡа автомобиль юлы ла, тимер юл да булмағанға күрә, халыҡ баш ҡалаға барыр өсөн бер-нисә тәүлек ваҡытын әрәм итә ине. Етмәһә, был төбәк балалары тик гуманитар факультеттарға ғына уҡырға инә алды. Күпселек яҡындағы Магнитогорск педагогия институтына йә Орскиға уҡырға барыуҙы ҡулайыраҡ күрҙе. Ә үҙебеҙҙең баш ҡалабыҙҙа был төбәктән барып уҡыған студенттар бик аҙ булды. Миҫал өсөн: 80-се йылдар аҙағында ул ваҡыттағы ауыл хужалығы институтында беҙҙең төбәктәге һигеҙ райондан уҡыған студенттарҙың иҫәбе Өфө эргәһендәге Шишмә районынан уҡығандар иҫәбенә тигеҙ ине. Шуға ла Сибайҙа юғары уҡыу йорто асыу мәсьәләһен халыҡ күтәреп алды һәм республика етәкселегенә мөрәжәғәт итте.**



Етәкселек мәсьәләне ыңғай хәл иткәс, Сибай ҡалаһы хакимиәтенең ул ваҡыттағы башлығы Йәрмөхәмәтов Зиннур Ғөбәйҙулла улының ярҙамы менән ҡалабыҙҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының филиалы асылды. Бер-нисә уҡытыусы, шул иҫәптән мин дә, Өфөнән Сибайға ебәрелдек. Факультеттың эшен уңышлы ғына башлап ебәрҙек. Унда башланғыс класс уҡытыусылары һәм балалар баҡсаһы тәрбиәселәре әҙерләү төркөмдәре асылыуы халыҡ тарафынан яҡшы ҡабул ителде. Күп тә үтмәй, беҙҙең филиалда Башҡорт дәүләт университеты ла үҙенең бер факультетын асып ебәрҙе. Был факультетта тәүҙә хоҡуҡ, тиҙҙән иҡтисад бүлектәре асылды. 1998 йылда ике филиалды берләштереү һөҙөмтәһендә Сибай институты барлыҡҡа килде. Институт Башҡорт дәүләт педагогия институты ҡарамағынан Башҡорт дәүләт университеты ҡарамағына күсерелде.

Бөгөн институтыбыҙ - ҙур маҡсаттар менән алға барған уҡыу йорто: 13 һөнәр буйынса белгестәр әҙерләйбеҙ, ситтән тороп уҡыу бүлектәре менән бергә, бөтәһе 5 меңгә яҡын студент белем ала. Беҙгә эшкә килгән белгестәрҙең 65 проценты - үҙебеҙҙең институтты тамамлаған студенттар. Шулай уҡ тирә-яҡ ойошмаларҙың 60-65 процентын кадрҙар менән тәьмин итәбеҙ.

Башҡорт дәүләт университеты Сибай институтының киләсәге ҙур булыр, тигән өмөттәбеҙ. Институт эшен ҡандидатлар 2 генә фән кандидаты башлап ебәргән булһа, бөгөн бында 10-лап фән докторы, йөҙҙән ашыу фән кандидаты эшләй. Унан тыш, башҡа уҡыу йорттарынан күренекле ғалимдарҙы саҡырып, студенттарға белем биреү мөмкинлеген кинәйтәбеҙ.

Республика Президенты Рөстәм Хәмитов август айында беҙҙең уҡыу йортонда булған сағында институтты яңы баҫҡысҡа күтәрергә - яңы корпустар төҙөргә кәрәк, тигән ниәтен белдерҙе. Был - күптән көҙәлләнгән хәл. Әле беҙ ул эштәрҙе атҡарып сығырға әҙерләнәбеҙ. БДУ-ның Сибай филиалының киләсәктә айырым уҡыу йорто булып китеүенә лә өмөт бар. Сөнки уҡыу йорто матди база буйынса ла, кадрҙар әҙерләү буйынса ла, студенттарға биргән белем буйынса ла күптән үҙаллы уҡыу йорто кимәленә етте.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогия фәндәре кандидаты, профессор.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШТӘРЕБЕҘ!

**Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Шулай итеп, үҙебеҙҙең алға ошо һорауҙарҙы ҡуйбыҙ һәм 2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылырға саҡырабыҙ һеҙҙе. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тынысылығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма алаҫаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ.

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп, 2011 йылдың тәүге ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 330 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ, ә предприятие һәм ойошмалар өсөн тәғәйенләнгән индексыбыҙ - 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Григорий Рапота булып китте. Ул РФ Волга буйы субъекттары ҡануниәт органдары ассоциацияһы ултырышы эшендә һәм баш ҡала ил Президентының ҡабул итеү бүлмәһен асыуҙа ҡатнашты. Шулай уҡ тулы хоҡуҡлы вәкил республиканың йәш уҡытыусылары менән аралашты, Башҡорт дәүләт университетында Бәләкәй дәүләт идараһы академияһы тыңлаусылары менән осрашты.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов БР Хөкүмәтенә бөтә ҡала һәм районлар буйынса граждандарҙы иҫке йорттарҙан күсереү программаһын эшләргә ҡушты. Йыл башына Башҡортостандың 16 ҡалаһында һәм 30 районында 325 мең квадрат метр торлаҡ авария хәлендә булған. Был йорттарҙа 40 меңгә яҡын кеше йәшәй. Йыл башынан 6 мең квадрат метр майҙандан 1,5 мең кеше бөтөн унайлыҡтары булған йорттарға һәм фатирҙарға күсерелгән. Президент әйтеүенсә, ошо темп менән барһаҡ, иҫке торлаҡ мәсьәләһен 25-30 йылһыҙ хәл итеп булмаясаҡ. Шуға ла иҫке йорттарҙан күсереү буйынса яңы программа экономкласлы торлаҡ төҙөлөшө күләмен киҫкен арттырыуҙы күҙҙә тоторға тейеш.

✓ 12 октябрҙә Өфөнөң Нефтеселәр мәҙәниәт һарайында Экологик форум үтәсәк. Уны Башҡортостан Хөкүмәте, Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең БР идаралығы, Урал буйы экологик, технологик һәм атом күҙәтеүе идаралығы, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, "Лигас" үҙәге үткәрәсәк. Форум сиктәрендә "УралЭкология. Сәнәғәт хәүефһеҙлеге-2010" күргәҙмәһе, фәнни-ғәмәли конференция, түңәрәк өҫтәл артында фекер алышыуҙар ойоштороласаҡ.

✓Өфөлә Башҡортостандағы муниципаль берәмектәрҙең III съезы үтте. Унда республика муниципалитеттарынан 700-ҙән ашыу вәкил ҡатнашты. Форумға Федерация Советы ағзалары, Дәүләт Думаһы, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, дәүләт власы органдары, йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре лә саҡырылғайны.

✓Бөтә Рәсәй ғилми китаптар конкурсында еңеүселәр араһында педагогия фәндәре кандидаты Ғәлиә Мөхәмәтйәнованың да исеме бар. Ул Педагогика һәм уҡытыу методикаһы тигән номинацияла еңеү яулаған.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ЛУЖКОВТЫ ЭШТӘН СЫҒАРЫУ...

## баш ҡала байлығын ҡабаттан бүлеүме, әллә власть вертикален артабан нығытыуمы?

**Йәмғәт, 2010 йылдың сәйәсәт өлкәһендәге иң мөһим ваҡиғаһы - 28 сентябрҙә Мәскәү мэры Юрий Лужковтың вазифаһын ҡалдырып китеүе. Әйттем бит, китә, тип. Китте. Үҙ теләге менән дә түгел хатта. Президенттың ышанысын юғалтыу сәбәпле. Ғөмүмән, бик ҡыҙыҡ формулировка был. Медведев үҙе лә "Быға тиклем былайтып бер генә губернаторҙы ла эштән алған юҡ ине", тип ҡуйҙы. Әммә киләсәктә булыуы мөмкин, тип тә өҫтәне. Тимәк, оҡшап ҡалған. Былайтып губернаторҙарҙы эштән сығарыу, йәғни.**



Бер ай ваҡыт кәрәк булды Дмитрий Медведевҡа Юрий Лужковтың "артына тибер" өсөн. Ошо һүҙҙәрҙе ҡулланыуыма аптырамағыҙ - губернаторҙар, президенттар һәм Мәскәү мэры өсөн эштән ошолайтып, иң оло түрәнең "ышанысын юғалтып" (йәғни "тибелеп") китеүҙән дә хурлыҡлы нәмә юҡтыр ул. Олораҡтар хәтерләйҙер, Совет заманында хеҙмәткәрҙең "артына тибеү" өсөн Хеҙмәт кодексында бик уңайлы статья була торғайны. 33-сө. Хеҙмәт кенәгәһендә "33-сө статья буйынса эштән ебәрелде" тигән яҙыу торған кеше, күп булһа, урам һепереүсе, йөк ташыусы, йәки ҡаҙанлыҡҡа кочегар булып ҡына урынлаша ала ине. Лужков кочегар булмаҫ ул, әммә башҡа ҡайһы бер элекке губернаторҙар төйәк иткән "йылы" урындарға (Федерация Советына, мәҫәлән) бер нисек тә дәғүә итә алмаясаҡ. Сөнки, йәмғәт, ышанысты юғалтты. Ышаныһыҙ кешегә бер нәмәне лә тапшырып булмай инде.

Мәскәү халҡы Лужковтың китеүенә артыҡ ҡайғырманы ла, шатланманы ла, шикелле. Һәр хәлдә, демонстрация һәм митингыларға сыҡманы, баррикадалар төҙөргә ташланманы. Хәйер, ҡайһы бер ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенсә, гейҙар (башҡортса әйткәндә, "ҡыҙ тәкә"ләр) ныҡ ҡыуанған, имеш. Улар, бахырҙар, инде нисәмә йыл Мәскәүҙә парад үткәрә алмай ыҙалай икән. Лужков ризалығын бирмәгән, баҡтиһәң. Әле бына рөхсәт иткәндәр, йәнәһе. Әллә шуларға асыҡтан-асыҡ (йәғни, ҡайһы бер "ирҙәр"гә ҡатын-ҡыҙҙар кейеме кейенеп йәки ярым-яланғас ҡалып) Мәскәү урамдары аша үтергә ирек бирмәгәнгә Лужков Президенттың ышанысын юғалтҡан микән?

Хәйер, аңлап тораһығыҙҙыр, был бит мәрәкә генә. Телевизорҙы ҡарап, гәзиттәрҙе уҡып торабыҙ ҙа баһа: Лужков хәләл ефете менән бергәләшеп Мәскәүҙе үҙенең шәхси биләмәһенә әүерелдергәнен дә ишеттек. Тарихи ҡомартҡыларҙы аяуһыҙ емергәндәрен дә, баш ҡаланың тарихи үҙәген тар-мар иткәндәрен дә, юлдарҙа бөтмәҫ-төкәнмәҫ "тығындар" булдырғандарын да, былай ҙа сәскә атҡан коррупцияға "һыу ҡойоп" үҫтереп торғандарын да һәм... Елена Батуринаның (Лужковтың хәләл ефете) Мәскәүҙең генә түгел, Рәсәйҙең иң бай кешеләре иҫәбендә икәнен дә беләбеҙ. Ғөмүмән, Батуринаның бизнесы Мәскәү менән генә сикләнмәй, үҙенең һәрмәүестәрен Башҡортостанға һуҙыуы хаҡында ла хәбәрҙарбыҙ. Хатта ки, Батурина-Лужкованың Өфөнән алыҫ түгел гүзәл бер урында "Батурина "Рублевка"һы төҙөүе хаҡында имеш-мимеш килеп ишетелде.

Уны, Лужковты тим, нисек итеп быға тиклем 18 йыл буйына Мәскәү мэры посында тотҡандар икән - шуныһы аптырамалы. Ошо арала Интернетта Лужковтың Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевҡа яҙған хатын урынлаштырғайнылар. Үҙе әйтеүенсә, ул 2008 йылда уҡ Дмитрий Анатольевичтан эштән ебәреүҙе һораған икән. Президентыбыҙ ебәрмәгән. Тимәк, кәрәк булғанмы? Ә хәҙер? Кәрәге бөткәнме? Әллә ҡартайып эшләктән сыҡҡанмы?

Дөрөҫ, йәмғәт, Лужков йәш түгел. Ул "айфон" һәм "айпод" менән ҡуллана алмайҙыр, "твиттер"ҙың нимә икәнен дә белмәйҙер, моғайын. Ул үҙен һаман да халыҡ тарафынан һайланып ҡуйылған етәксе тип фараз итәләр. Ә иң мөһиме, ул үткән 18 йыл эсендә Мәскәүҙе тулыһынса тиерлек үҙ ҡулына ҡармап алды. Рәсәйҙең баш ҡалаһы бөгөн бит Рәсәйҙең ябай берәй төбәге, йәки ҡалаһы түгел. Унда бөтә Рәсәйҙән килгән аҡса туплана, унда иң мөһим сәйәси һәм иҡтисади ҡарарҙар ҡабул ителә. Ниһайәт, унда кәмендә 12 миллион кеше йәшәй. Шуларҙың яртыһы - һайлаусылар. Ә ике йылдан илебеҙҙә Президент һайлауҙары. Яңы осорға етәксе һайлаясаҡбыҙ, тимәк.

Әйткәндәй, элеккесә түгел хәҙер Президент срогы. Ете йылға киләсәк 2012 йылда һайланған түрә. Баш ҡалала йәшәүселәр нисек тауыш бирер, кемде һайлар, кемде өҫтөн күрер - был һорауҙарға кисә Лужков яуап бирә алыр ине... Ә бөгөн кем яуап таба алыр икән?

Аңлашылып тора бит, быйылғы алмашыныуҙар, түрәләрҙең "осоуы", "үҙ теләктәре менән" эштән китеүҙәре - тап ана шул "2012 проблемаһы" менән бәйле лә инде. Президент һайлауҙары алдынан төбәк етәкселәрен бер сафҡа баҫтырыу ине Үҙәктең маҡсаты. Һәр бер тауыш өсөн һатыулашҡан "ҡарт бүреләр" урынына Үҙәктән килгән һәр бер әмерҙе, һәр бер бойороҡто еренә еткереп, хатта арттырып үтәүсе һөҙөмтәле менеджерҙар кәрәк булды. Ә төптәнерәк уйлағанда, етәкселәрҙе генә түгел, ғөмүмән, региондарҙы бер сафҡа теҙеү, йәғни унификациялау тураһында һүҙ бара. Төньяҡ Кавказ республикалары етәкселәре, мәҫәлән, "Рәсәйҙә бер генә Президент булырға тейеш" тигән лозунг аҫтында үҙҙәренең атамаларынан баш тартып, республика башлыҡтары ғына булып ҡалды. Әстрхан өлкә депутаттары иһә урындағы закондар сығарыу органдарының атамаларын бер төрлө итергә тигән тәҡдим менән сығыш яһаны. Сираттағы аҙым, күрәһең, төбәктәрҙең атамаларына ҡағыласаҡ. Тик уныһы инде һайлауҙарҙан, йәғни, 2012 йылдан һуң буласаҡ. Унитар Рәсәй төҙөү өҫтөндәбеҙ.

Хәйер, һүҙебеҙ Лужков хаҡында ине бит әле. Унаң тағы ла бер үҙенсәлеге бар - ул Рәсәй төбәктәре етәкселәре араһынан өлкә һәм республика башлыҡтарын, шул иҫәптән Мәскәү мэрын да, тәғәйенләп түгел, ә халыҡ тарафынан һайлап ҡуйыу нормаһын закондарға ҡабаттан ҡайтарыуҙы талап иткәндәрҙең һуңғыһы. Билдәле булыуынса, был процедура үҙ ваҡытында Владимир Владимирович Путин тарафынан юҡҡа сығарылғайны. Үҙ мәлендә халыҡ тарафынан һайланырға теләүҙәре тураһында белдереүселәр, хатта талап итеүселәр араһында Минтимер Шәймиев һәм Мортаза Рәхимов бар ине. Улар бөгөн дә бар, тик власта түгел. Шулай итеп, 2010 йылды - "Лужков (Рәхимов, Шәймиев) киткән йыл", тип кенә түгел, ә "Рәсәйҙең федерализм менән хушлашыу йылы" тип тә атарға мөмкин. Рәсәй төбәктәре менән идара итеүгә яңы кешеләр килә. Улар, бәлки, тыуған урыны, милләте, белем алған урыны менән өлкәләргә һәм республикаларға нисек тә булһа бәйлеләр. Әммә улар урындағы халыҡ тарафынан һайлап ҡуйылмаған, ә юғары власть тарафынан тәғәйенләнгән менеджерҙар. Улар юғары вазифа биләгәндән һуң үҙе менән урындағы халыҡты таныштырыр, ниндәй эшкә һәләтле икәнен иҫбат итер өсөн күпмелер ваҡытын сарыф итергә мәжбүр. Эйе, ваҡыт күрһәтер...

Һәм тағы ла берҙе Лужков тураһында. 74 йәш тулыуға ҡарамаҫтан, ул әле дәртле һәм шәп. Унаң Мәскәү мэры вазифаһынан ошолайтып оло тауыш ҡуптарып китеүе буштан, үҙ көстәренә саманан тыш ышаныуҙан килмәй. Ул пенсия ашап ултырырға уйламай. Ул сәйәси карьераһын дауам итергә йыйына. Ниндәй сифаттамы? Быны ул үҙе генә белә, ахыры.



**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл ярты йылда ете йөҙҙән ашыу Бөйөк Ватан һуғышы ветераны шифаханаларҙа һаулығын нығытты. Льготаға хоҡуғы булған граждандарҙы шифаханала дауалауҙы ойоштороу һәм уларҙың юлда түләүһеҙ йөрөүен тәьмин итеү 2005 йылдан алып РФ Социаль страховка фондына йөкмәтелгән. Үткән осорҙа шифаханала дауаланыу хоҡуғынан республикалағы 73,3 мең кеше файҙаланған, путевкалар хаҡын түләүгә 975 млн һум аҡса тотонолған. Йыл башынан физик мөмкинлеге сикләнгән балаларға һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәргә 520 путевка бирелгән.

✓Конгресс-холда БР Журналистар союзының XVIII сираттан тыш съезы булып үтте. Унда республиканың төрлө төбәктәренән 88 делегат, ҡунаҡтар, рәсми вәкилдәр ҡатнашты. Ултырышты БР элемтә һәм киң коммуникациялар министры Борис Мелкоедов асты. Съезда журналистарҙы хоҡуҡи яҡлау менән тәьмин итеү, лайыҡлы эш хаҡы түләү, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу мәсьәләләре тикшерелде. БР Журналистар союзының яңы рәйесе вазифаһына "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Дәүләтбәков һайланды.

✓14-25 октябрҙә үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек сиктәрендә Бөтөн донъя башҡорттары (конгресы) Башҡарма комитеты Башҡортостан Республикаһының 42 районы ауылдары тарихын сағылдырған "Население. Населенные пункты. XVIII-XXIвв." тигән брошюра сығарҙы. Архив материалдары һәм ғилми сығанаҡтар нигеҙендә яҙылған белешмәлә һуңғы ике быуатта башҡорт ауылдарының барлыҡҡа килеүе, үҫеше, милли составы күрһәтелгән. Брошюрала шулай уҡ башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы, айырым төбәктәргә хас диалект һәм һөйләш үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәттәр бар.

✓Рәсәй аҙыҡ-түлек баҙарында социаль мөһим аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артыуы күҙәтелә башланы. Шунаң менән бәйле, ауыл хужалығы тауарҙары етештереүсе берләшмәләр, предприятиелар һәм сауҙа ойошмалары көндәлек ҡулланылған аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙы бер кимәлдә тотоу маҡсатында килешеү төҙөнө. Был килешеү сиктәрендә Башҡорт сауҙа ассоциацияһы 1 октябрҙән "Социаль кәрзин" акцияһы үткәрә. "Пятерочка", "Полушка", "Матрица", "Байрам", "АИФ", "7 копеек", "Семерочка" сауҙа селтәрҙәре был акцияла ҡатнашырға теләк белдергән.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЖУРНАЛИСТЫҢ ҺҮҘЕ...

## хәҡиҡәттән ситләшмәһен

**Баш ҡалала Башҡортостан полиграфистары һәм киң матбуғат саралары хеҙмәткәрҙәре өсөн ойошторолған "Тамға-2010. МедиаИндустрия. Полиграфия. Реклама" XIII төбәк-ара махсуслаштырылған күргәҙмә тамамланды.**

Республика йылына арналған был күргәҙмәлә Башҡортостан ҡала һәм районДарынан, Мәскәү, Төмән, Урал-Волга буйы ҡалаларынан массмедиа, полиграфия һәм реклама өлкәләрендә эшмәкәрлек итеүсе алдынғы 80-гә яҡын ойошма шәхси экспозицияһын ойошторҙо. 1993 йылдан башлап үткәрелгән был форумдың журналистар араһында баһаһы ҙур: тап ошондай сарала республиканың төрлө төбәктәрендә уңышлы эшләп килгән предприятие һәм ойошмаларҙың продукция өлгөләре, матбуғат баҫмалары менән танышырға, үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашырға мөмкин. БР Элемтә һәм киң коммуникациялар министры Борис Мелкоедов та та күргәҙмәнең бөтә яҡлап конструктив диалогҡа ҡоролоп, полиграфия өлкәһенең артабанғы үҫеше өсөн этәргес көс булып тороуын билдәләп китте. Республика полиграфистарының тәжрибәһен баһалап, Полиграфистарҙың төбәк-ара ассоциацияһы президенты Борис Кузьмин "Тамға"ны "имиджлы" сара тип атаны һәм унда ҡатнашыусыларҙы полиграфия өлкәһенең үҫеш перспективалары хаҡында әүҙемерәк фекер алышырға саҡырҙы.

Күргәҙмә сиктәрендә Йәш журналистарҙың төбәк-ара фестивале лә эшләне. Етенсе тапҡыр уҙғарылған фестиваль Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашыуҙан башланды. Унда һүҙ республика бюджеты, эшһеҙлек, Рәсәй вуздарында белем алыусы йәштәр һ.б. тураһында барҙы. Президент сығышында төбәктең көслө иҡтисади ҡеүәткә эйә булыуын, Рәсәйҙең төп терәге булыуын билдәләне. Әммә республика артабан да үҫешһен өсөн бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтерергә, халыҡты эш һәм лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итергә кәрәклеген һәм был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә йәш быуынға ҙур өмөттәр бағлауы тураһында ла әйтте Рөстәм Зәки улы. Бынан тыш, киң мәғлүмәт саралары мәсьәләләре лә Президент иғтибарынан ситтә ҡалманы. Мәҫәлән, бөгөн бурыстар тураһында күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеп, дөрөҫөн яҙғанда күп мәсьәләләрҙе хәл итеүе еңелерәк буласаҡ, әммә был фекер төрлөлөгө булырға тейеш түгел тигәнде аңлатмай, тип билдәрҙе Рөстәм Хәмитов. Шулай уҡ ул йәш журналистарҙы сенсация артынан ҡыумаҫҡа, ә йәмғиәтте борсоған темаларға аналитик материалдар яҙыуға күберәк иғтибар бүлергә кәңәш итте.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*




# ФЕКЕРҘӘРЕГЕҘҘЕ...

## ҡысҡырып әйтегеҙ

**Баш ҡалабыҙҙа инде алтынсы тапҡыр уҙғарылған "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленең маҡсаты - йәмғиәтебеҙҙәге кире ғәҙәттәрҙе бөтөрөргә, матурлыҡ тыуҙырырға, кешеләрҙең күңеленә изгелек орлоҡтары һалырға, уйландырырға, фекерләргә ярҙам итеү. Сара аҡрынлап булһа ла ошо маҡсатына өлгәшә бугай. Ошо фестивалдә ҡатнашҡан ҡайһы бер социаль рекламаларҙың баш ҡалабыҙ урамдарындағы таҡталарҙа урын ала башлауы шулай тип уйларға урын бирә.**

Башҡортостандың бөтә ҡалаларында, Рәсәй Федерацияһында һәм БДБ илдәрендә үҙенең фекерҙәштәрен табыусы фестиваль быйыл тағы ла талантлы ижади эҙләнеүселәрҙе, йәмғиәтебеҙҙә булған проблемаларға битараф булмағандарҙы ижади форумға саҡыра. Иҫегеҙгә төшөрөп уҙабыҙ: уҙған йылда "Ҡала мөхите" фестивале үҙенең ҡатнашыусылары (500-гә яҡын эш һәм 174 ҡатнашыусы теркәлгәйне) һәм георграфияһы (Үтәш ауылынан алып, Белоруссия һәм Ҡаҙағстан республикаларына тиклем ҡатнашты) менән рекорд ҡуйғайны.

Быйыл был сара 17 ноябрҙә Өфөнөң Йәштәр һарайында уҙасаҡ. Шуныһы ҡыуаныслы: социаль реклама фестиваленең абруйы йылдан-йыл арта бара, беренсенән, унда ҡатнашырға теләүселәр һаны артһа, икенсенән, хәҙер ҡатнашыусылар заманса мәғлүмәт технологияларын ҡулланып эш итә ала. Быйыл фестивалдә ҡатнашыу мөмкинлектәре лә киңәйтелде: теләүселәр конкурсҡа ғаризаларын һәм үҙ эштәрен интернет селтәрҙәре аша ғына ебәрә ала. Был бигерәк тә республиканың башҡа ҡалаларында һәм ауылдарында, шулай уҡ Рәсәйҙә һәм БДБ илдәрендә йәшәгән конкурсанттарға ҙур уңайлыҡтар тыуҙырҙы. Әгәр ҙә конкурста ҡатнашырға теләһәгеҙ, фестиваль сайтында **(http://www.ufacity.info/sreda/2010/)** "Ҡатнашырға" тигән бүлемдә ғаризағыҙҙы урынлаштыра, ә файлдар алмаштырыу сервисы ярҙамында (мәҫәлән: **http://rapid.ufanet.ru/**, **http://www.bashare.ru/)** үҙегеҙҙең эштәрегеҙҙе ебәрә алаһығыҙ.

Тағы ла быйыл "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивале сиктәрендә "Өфө ҡалаһының Торлаҡ-коммуналь хужалығы" муниципаль унитар предприятияһы "Йортта һыуҙы, йылыны, электрҙы нисек һаҡларға?" тигән темаға иң яҡшы проект йәки ижади идея өсөн үҙ социаль призын - керәҙле кеҫә телефоны булдырҙы. Идеялар плакаттар, баннерҙар һәм мультфильмдар формаһында кәүҙәләндерелергә мөмкин. Жюри ағзалары еңеүселәрҙе билдәләгәндә ҡатнашыусыларҙың фекерләү талантын, ҡала өсөн мөһим проблеманы хәл итеүгә ғәҙәти булмаған юл табыуҙарын, тапҡырлыҡ, үткер аҡыллылыҡ һәм форманың сағыулығын күҙ уңында тотасаҡ.

Быйыл "Ҡала мөхите" Социаль реклама фестивале "Фекерҙәрҙе ҡысҡырып!" девизы аҫтында үткәрелә. "Фекерҙәр!" тип, ойоштороусылар фестивалдә ҡатнашыусы һәр кемде әйләнә-тирәбеҙҙә барған хәл-ваҡиғаларҙы үҙ-аллы фекерләп, яңы ижади теләктәрҙе, уй-ниәттәрҙе тыуҙырырға һәм тормошҡа ашырырға саҡыра. "Ҡысҡырып", тимәк, уй-фекерҙәреңде асыҡ, билдәле, дөрөҫ итеп, ысын күңелдән әйтеү, халыҡҡа еткереү. Йола буйынса баш ҡалабыҙ социаль реклама өлкәһенән үҙҙәренең профессиональ оҫталыҡ серҙәре менән бүлешергә әҙер булыусы ҡунаҡтарҙы көтә.

**Шулай итеп...**

**Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә кешелекте күптән борсоған социаль проблемаларҙы асыҡтан-асыҡ тикшерергә, фекер алышырға һәм был турала мәғлүмәти асыҡлыҡ кәрәклеге тураһында һүҙ йөрөткән саҡта, был форум яҡшы ижади проекттар һәм идеялар өсөн емешле майҙанға әйләнеүе лә ихтимал. Фестиваль һәр ваҡыттағыса яңы һәм ҡыҙыҡлы ижади эштәр, технологик саралар тәҡдим итә. Иң мөһиме, был социаль рекламалар ҡала урамдарында үҙ урынын һәм тәғәйенләнешен тапһын ине.**

**Зәкирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

*ХОККЕЙ*

# ҠОРО ИҪӘП МЕНӘН

**Континенталь хоккей лигаһы чемпионаты башланыуға бер ай ваҡыт үтеп тә китте. Был ваҡыт эсендә "Салауат Юлаев" командаһы 7 матчта уйнаны һәм һуңғы уйында Хабаровск ҡалаһының "Амур" хоккейсыларын еңеп, үҙ төркөмөндә икенсе урынға сыҡты.**

Юлаевсылар уйын башланыу менән үк бер-бер артлы көслө һөжүм ойошторҙо. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне. Майҙан хужалары ҡунаҡтарҙың аҙсылыҡта ҡалыуынан оҫта файҙаланды. Һөжүмсе Игорь Григоренко һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы тота алмай ҡалды. Тиҙҙән Якуб Клепиш шайбаны ҡаршы яҡ ҡапҡаһына оҙатты.

Алыҫ Көнсығыш хоккейсылары яуап ҡайтара алманы. Шулай итеп беренсе осор 2:0 иҫәбе менән тамамланды.

Икенсе осорҙа Александр Радулов иҫәпте өскә еткерҙе. Ҡунаҡтарҙың һирәк-һаяҡ һөжүме һөҙөмтәһеҙ бөттө, сөнки Виталий Колесник һаҡлаған ҡапҡаны асырға әмәл таба алманылар.

Хабаровск хоккейсылары һис булмаһа бер шайба менән яуап ҡайтарыу өсөн майҙан хужалары ҡапҡаһы алдында әленән-әле хәүеф тыуҙырҙы. Әммә Виталий Колесник ҙур оҫталыҡ, сослоҡ күрһәтте - үҙ ҡапҡаһына шайба индермәне. Ул арала Александр Радулов ҡунаҡтар ҡапҡаһына дүртенсе голды индереп тә өлгөрҙө.

Шулай итеп, уйын 4:0 иҫәбе менән юлаевсылар файҙаһына тамамланды. Хәҙер "Салауат Юлаев" командаһы сит ҡалаларҙа көс һынашасаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Үткән аҙнала Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә "Милләттәр кросы -2010" Бөтә Рәсәй йүгереү көнө булып үтте. Өфөлә үткән сарала ун меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Милләттәр кросы - халыҡты физик күнекмәләр менән даими шөғөлләнеүгә, сәләмәт тормошҡа йәлеп итеүсе бик шәп сара. Был көндө һәүәҫкәр спортсылар менән бергә профессиональ спортсылар ҙа, хатта олимпиадаларҙа ҡатнашыусы чемпиондар, спорт ветерандары ла стартҡа баҫты.

✓ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы башланыуға ни тиклем аҙыраҡ ваҡыт ҡалһа, һорауҙар ҙа күбәйә бара. Халыҡ иҫәбен алыу ни өсөн кәрәк? Уны кем үткәрә? Ошондай һорауҙар тыуғанда 273-43-42 телефоны аша БР буйынса Дәүләт статистика комитетының Ленин районы идаралығына шылтырата алаһығыҙ.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев белдереүенсә, декабрь айында ҡала халҡына тәҡдим ителгән электрон муниципаль хеҙмәттәр һаны 70-кә етәсәк. Бөгөнгө көндә Өфөлә медицина, социаль сәйәсәт өлкәһендә 100-гә яҡын мәғлүмәти система әүҙем ҡулланыла.

✓ Өфөнөң икенсел торлаҡ баҙарында хаҡтар 0,4 процентҡа күтәрелеп, бөтә төр фатирҙар буйынса бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 43,15 мең һум тәшкил иткән. Йыл башынан икенсел торлаҡҡа хаҡтар 7,8 процентҡа артҡан.

✓ Өфөлә көҙгө йәрминкәләр дауам итә. Уҙған йылдарҙа баш ҡаланың егермегә яҡын майҙанында ауыл хужалығы йәрминкәләре эшләне. Уларға республиканың бар райондары ла йәлеп ителде. Был йәрминкәләрҙә картуфтың килограмын - 20 һумдан, кәбеҫтәне - 20, кишерҙе - 30 һумдан, 50 килограмлыҡ бер тоҡ ондо 650 һумдан, иттең килограмын 150-170 һумдан һатып алырға мөмкин.

✓БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, Башҡортостан Республикаһында 11 октябрь байрам һәм ял көнө булып тора. Шулай итеп, 9, 10, 11 октябрҙә ял итәсәкбеҙ.

✓ ***Борон "Итәк-еңен япмай йөрөй", ти торғайнылар, ә хәҙер итәк тә юҡ, ең дә юҡ. Егеттәрҙең аҡылы ла, ҡулы ла етмәҫлек матурлыҡ, серлелек урамға сығып бөттө. Шунан ниңә егеттәр кәләш алырға атлығып торһон инде?***

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЙОЛАЛАРҘЫ ТЕРГЕҘЕРГӘ...

## өлкәндәрҙең дәрте кәрәк

**Баш ҡалала "Тереһыу" исемле күп тармаҡлы клуб ойошторола башлауы тураһында ишетеп, уның маҡсаттары, эшмәкәрлеге тураһында яҡындан танышыу ниәтендә, клубты ойоштороусылар менән күрешергә булдыҡ. Дәрт-дарманы ташып торған, йыр-моңға әүәҫ, көләкәс, асыҡ йөҙлө, йор һүҙле ағай-апайҙар йыйылғайны бында. Барыһының да йөҙҙәре таныш. Бәй, шулай булмай ни! Баш ҡалала ойошторолған барлыҡ сараларҙа ла уларҙы йә ҡатнашыусы, йә тамашасы булараҡ күрергә була бит! Улар менән һоҡланмау һәм ғорурланмау мөмкин түгел: олоғайған көндәрендә лә тик ултырмай, нимә булһа ла ойоштороп, бер булып йүгереп йөрөйҙәр. Үҙҙәре лә: "Беҙ ошолай төрлө сараларҙа ҡатнашып, бер яҡтан, үҙебеҙгә ял, күңелебеҙгә тыныслыҡ, рухыбыҙға ҡеүәт алһаҡ, икенсе яҡтан, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, сәнғәтен үҫтереүгә, халыҡ ауыҙ-тел ижадын киңәйтеүгә, йолаларыбыҙ һаҡланып ҡалыуға, йәш быуынды тәрбиәләүгә ниндәйҙер өлөш индерәбеҙҙер, тип уйлайбыҙ", - тиҙәр. Яңы клубты ла изге маҡсаттар менән ойоштора башлаған улар. Хәйер, был турала һөйләү өсөн һүҙҙе ошо клубты ойоштороуға күп көс һалған ағинәйҙәрҙең береһе Хәҙисә АРҒЫНБАЕВАға бирәйек:**

- Үҙем Таналыҡ һыуын һыулап үҫкән түңгәүер ырыуы ҡыҙымын. Күп йылдар Сибай ҡалаһында йәшәнем. Хаҡлы ялға сыҡҡанымдан алып сәхнәнән төшкәнем юҡ, тиерлек. Сибайҙа йәшәгән сағыбыҙҙа халҡыбыҙҙың изге ҡомартҡыларынан ғаилә-этнография музейы булдырғайныҡ. Ул музей менән ҡайҙа ғына йөрөмәнек: Башҡортостандың бөтә районадарын тиерлек урап сыҡтыҡ, Мәскәүҙә лә, Магнитогорскиҙа ла булдыҡ. Тормош иптәшем вафат булып ҡалғас, миңә баш ҡалаға күсеп килергә тура килде. Ҡала хужаларына ҙур рәхмәт, улар минең һорауымды иғтибарһыҙ ҡалдырмай, музейымды ла бында күсереп алып килергә ярҙам итте.

Бөгөнгө көндә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында музей-тирмә булдырып, уның эргәһендә "Тереһыу" исемле клуб асыу буйынса эшләйбеҙ. Әле йыйылышып, төрлө осрашыуҙар ойоштора, төрлө сараларға әҙерләнә башланыҡ. Был клубҡа йөрөргә теләүселәрҙең йәше сикләнмәйәсәк, үҙ телебеҙҙә аралашыуға һыуһаған, күңел йылыһы табырға, йыр-моңдарыбыҙҙы ишетергә теләгән һәр кем ошо клубҡа килеп, күңеле теләгәнен таба ала.

"Тереһыу" клубы күп тармаҡлы буласаҡ. Мәҫәлән, берберећен таба, ҡауыша алмай интеккән төрлө йәштәге кешеләр өсөн "Димселәр мөйөш"ө ойоштораса҇быҙ. Үҙебеҙҙең милләт кешеләре өйләнһен, милләтебеҙ балалары артһын, яңғыҙаҡтар кәмеһен, тигән изге ниәттән башҡарасаҡбыҙ был эште һәм, иншалла, ниәттәребеҙ тормошҡа ашыр, тип уйлайбыҙ. Шулай уҡ боронғоса, үҙебеҙсә, халыҡсан итеп туй, бала тыуыу йолаларын үткәреүҙе лә үҙ өҫтөбөҙгә алырға торабыҙ. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың онотолоп барған бөтә йолаларын сәхнәләштереү юлы менән тергеҙергә, йәш быуынға еткерергә, тип һөйләштек.

Һәр беребеҙҙең үҙе төҙөгән шәжәрәһе бар. Әгәр шәжәрә залы булдырһаҡ, һәр кемгә үҙенең ырыуында булған данлыҡлы кешеләрҙең тарихын, йәшәйешен өйрәнергә, халыҡҡа еткерергә ҙур мөмкинлек буласаҡ. Күптәребеҙ шиғыр яҙа. Улар өсөн дә ниндәйҙер сара ойоштороһаҡ, ижадыбыҙҙы шулай уҡ йәш быуынды тәрбиәләүгә арнар инек.

Йәштәр араһында үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары күбәйҙе, ниндәйҙер проблеманан еңел сығыу юлын тапты улар. Йәш ҡыҙҙарҙың бәйһеҙлеге йөрәкте әрнетә. Борон "Итәк-еңен япмай йөрөй", ти торғайнылар, ә хәҙер итәк тә юҡ, ең дә юҡ. Егеттәрҙең аҡылы ла, ҡулы ла етмәҫлек матурлыҡ, серлелек урамға сығып бөттө. Шунан ниңә егеттәр кәләш алырға атлығып торһон инде? Бына ошо йүнәлештә лә эштәр алып барырға уйлайбыҙ. Табиптар тәмәке, араҡы, һыраның зыянын фәнни нигеҙҙә иҫбат итте, беҙ ҙә үҙебеҙҙең сәхнәләштергән әҫәрҙәребеҙҙә ошо проблемаға ҡағылырбыҙ.

Тағы ла шуныһы: хәҙер йәштәр телевизор ҡарамай, радио тыңламай, ә күп ваҡытын интернет селтәрҙәрендә үткәрә. Шуға күрә үҙебеҙҙең "Тереһыу" клубының сайтын булдырырға ла уйлайбыҙ. Замандан артта ҡалырға ярамай. Сайтыбыҙҙа үҙебеҙҙең эштәребеҙ генә түгел, ә файҙалы мәғлүмәттәр, фәһемле хикәйәттәр, мәҡәл-әйтемдәр хәҙисшәрифтәр ҙә урын алыр ине. Сәхнәләштерелгән йолаларыбыҙҙың видеороликтарын интернетҡа сығарһаҡ, унда ингән һәр кем уларҙы ҡыҙыҡһынып ҡарар, фәһем алыр, йолаларыбыҙ менән танышыр ине.

Әле "Ашҡаҙар таңдары"на "Кендек сәйе" тип аталған сәхнә әҫәре әҙерләп йөрөйбөҙ. Сценарийын мин үҙем яҙҙым, башҡалар менән бергә төҙәттек, ҡайһы бер өҫтәмәләр индерҙек. Беҙ үҙебеҙ өсөн түгел, ә халҡыбыҙ, киләсәгебеҙ өсөн эшләйбеҙ. Иншалла, изге ниәттәребеҙ тормошҡа ашмай ҡалмаҫ, тигән өмөттәбеҙ.

**Шулай итеп...**

**Урал батырҙың ауыҙына уртлаған тереһыуҙың бер тамсыһын да үҙе йотмай, тирә-йүнгә һибеп, тәбиғәтте терелткәнен, донъяға йәм өҫтәгәнен беләһегеҙ. Был клубты ойоштороусылар ҙа үҙҙәренең "тереһыу" тамсыларын тирә-йүнгә һибеп, донъяға ҡот өҫтәргә, иман, әхлаҡ таратырға, халҡын тура юлға баҫтырырға теләй. Хәйерле сәғәттә, тип уңыштар теләйек уларға!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



*ҺОРАУ - ЯУАП*

## "ТУҒАНЫМДАН ТУҠМАЛДЫМ"

**Мине бер туған ҡустым туҡманы, уға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылды, ләкин аҙаҡ эште мировой судҡа ебәрҙеләр. Ә мировой судья, был эштә енәйәтселек эҙҙәре күреп, уны кире ҡайтарҙы. Хәҙер эш участка милиционерында ята. Бер нисә аҙнанан ҡустым икенсе бер туғанымды һәм әсәйемде лә туҡманы. Мин "Ашығыс ярҙам" саҡырттым һәм "һуғыш суҡмарын" психиатрия больницаһына алып киттеләр, ул әле шунда. Психик ауырыу булыу сәбәпле, уға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатыуҙан баш тартҡандар. Минең эш буйынса, суд-медицина экспертизаһы үткәрелергә тейеш булһа ла, бер ни ҙә эшләнмәне, эш тағы ла мировой судҡа йүнәлтелде, теге ике эш буйынса ла бер ни ҙә эшләнмәне. Беҙгә ни эшләргә? Ҡустым башҡаларға ла зыян килтереүе ихтимал бит...**

- Психиатрия больницаһында ятҡанлыҡтан, тикшереү органдары туғанығыҙҙың ҡылыҡтары буйынса ниндәйҙер тикшереүҙәр үткәрә алмай. Күрәһең, эш туҡтатылғандыр. Ҡуйылған мәсьәлә урынлы, сөнки улар һеҙҙең сәләмәтлеккә ҡағылышлы, шуға күрә бөтә һорауар менән үҙ районығыҙҙың эске эштәр бүлеге начальнигына барығыҙ. Ә инде участковый йәки тикшереүселәр эште һүҙа, тип иҫәпләһәгеҙ, йәшәгән урынығыҙ буйынса прокуратураға мөрәжәғәт итегеҙ.

## МӘЖБҮРИ САРАЛАР

**Беҙҙең илдә медицина йәһәтенән ниндәй мәжбүри саралар ҡаралған?**

- РФ Енәйәт кодексының 99-сы статьяһы буйынса, суд түбәндәге сараларҙы билдәләй ала:

а) мәжбүри амбулатория күҙәтеүендә булыу һәм психиатрҙа дауаланыу;

б) дөйөм типтағы психиатрия стационарында мәжбүри дауаланыу;

в) махсуслаштырылған типтағы психиатрия стационарында интенсив күҙәтеү һәм мәжбүри дауаланыу.

г) үҙ иҫ-аҡылында булып та, психикаһы боҙолоу сәбәпле, дауалауға мохтаж кеше тарафынан яһалған енәйәт өсөн хөкөм ителгәндәргә яҙа менән бер рәттән суд психиатрҙа мәжбүри дауаланыу һәм амбулатор күҙәтеү сараһы тәғәйенләй ала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Һағыҙ урынына - бөтнөк

Кибеттәрҙә һағыҙҙың ниндәйе генә юҡ. Шуға ла барыһы ла, бигерәк тә балаға һағыҙ сәйнәргә күнекте. Һағыҙ сәйнәгән саҡта ауыҙҙа аҙыҡ эшкәртә торған һут барлыҡҡа килә һәм ашҡаҙан буш булыу сәбәпле, ул үҙен-үҙе эшкәртә башлай, яйлап боҙола, ауырта. Һағыҙ сәйнәү ғәҙәтенән арыныу һәм кариес булдырмау өсөн аҙнаһына 1-2 тапҡыр яртышар стакан бөтнөк төнәтмәһе эсергә, иртәнге һәм киске аштан һуң шул төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡатырға кәрәк. Ярты йылға бер тапҡыр ике аҙналыҡ курс үткәрһәгеҙ, кариестың эҙе лә ҡалмай, һағыҙ ҙа кәрәкмәй. Был ысул бигерәк тә балаларға файҙалы.

## Ашҡаҙан киҙеүе

Быйыл эҫе йәйге көндәрҙә күптәрҙе ашҡаҙан киҙеүе: эс китеү, ҡоҫоу яфаланы. Унан ҡотолоу өсөн:

*2 ҡалаҡ мүк еләген һәм япраҡтарын 2 стакан һыуҙа бешереп, 10 минут тирәһе һүрән утта ҡайнатаһың. Һыуытып һөҙгәс, көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсәһең;

*муйылды ҡайнатып эсергә, тешең булһа, емешен сәйнәп ашарға кәрәк;

*имән һәм балан ҡайырыһын ҡайнатып эсеү ҙә файҙа бирә. Тик йәш ағастың ҡайырыһы булырға тейеш.

## Аяҡтар талһа

Әле көҙгө эштәр күп, кеше көнө буйы аяҡ өҫтөндә. Кискә аяҡтар ныҡ тала. Уларға ял биреү өсөн 1 стакан таҙартылған көнбағыш майына 1 балғалаҡ тоҙ һалып болғатығыҙ һәм иреп бөткәнен көтөгөҙ. Тоҙ иреп бөткәс, шуны табандарға, быуындарға һөртөп ышҡығыҙ, полиэтилен менән урап, йөн ойоҡбаш кейегеҙ. Ярты сәғәт ултырғас, аяҡтарҙы ҡайнар һыу менән йыуып, йоҡларға ятығыҙ. Аяҡтарҙың арыуы бөткәнен һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ.

## Абаға

Абаға тамыры организмды паразит ҡорттарҙан таҙарта, был файҙалы үҫемлек дарыуханаларҙа ла һатыла.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ватан һәм милләт

● Милләт һәм ватан өсөн хеҙмәт итергә тура килһә, уның өсөн рәхмәт һәм бүләк көтмәгеҙ. Бүләк көтөү шулай ҡалһын, фарыҙ ҡылдың, милләт һеҙгә яфа ҡылһа, һис үпкәләмәгеҙ, өҫтөгөҙгә йөкмәтелгән хеҙмәттәрҙән баш тартмағыҙ. "Калаларым һәм ҡәүемдәрем ни ҡәҙәр мине яфалаһалар ҙа, минең алдымда улар һаман хөрмәтле", - тигән гәрәп шиғырын уҡығыҙ һәм шулай итеп күңелегеҙҙе йыуатығыҙ.

● Дин һәм белем таратыу, мәктәптәр һәм хәйриә эштәре һәм нисек кенә булһа ла халыҡҡа ярҙам биреү өсөн тырышлыҡ сарыф итеү иң гүзәл гәйрәттер. Бының язаһы (бүләк) ла матур буласаҡ. Шуның өсөн изге һәм дин ҡушҡан эштәргә, милләт һәм дин файҙаһына ярҙам биреүҙе бәхет тип һанағыҙ. Күңелегеҙ менән һөйә-һөйә ярҙам бирегеҙ. Милләтегеҙгә белем һәм мәғрифәт таратығыҙ. Араларына дуҫлыҡ һәм мөхәббәт орлоҡтары сәсегеҙ. Дошманлыҡ һәм гонаһ эштәренә ярҙам итеүҙән һаҡланығыҙ. Бигерәк тә милләт зарарына бер хәреф тә һөйләмәгеҙ һәм бер нөктә лә яҙмағыҙ.

● Милләт файҙаһына хеҙмәт итеүселәрҙе үҙҙәре менән һөйләшмәҫтән элек, белер-белмәҫ килеш күңел тарлығы бәләһе сәбәбенән төрлө ялғандар менән ҡаралауға ынтылмағыҙ. Кеше зарарына хөкөм итергә ашыҡмағыҙ. Кешегә яла ягыу һәм гәйепләүҙе, шәм һүндереү кеүек еңел, тип иҫәпләмәгеҙ. Хөкөм итеүҙән элек фекерегеҙҙең дөрөҫлөгөндә шөбһәләнһәгеҙ, аҡыл эйәләренә мөрәжәғәт итегеҙ. Уларҙың фекерен алығыҙ. Фекерегеҙҙең яңылыш булыуы ихтимал.

### Аралашыу ҡағиҙәһе

● Аралашҡанда әҙәпле һәм һаҡлыҡлы булыу, аҡса сарыф итмәйенсә, халыҡтың ризалығын табыуҙыр. Әҙәпле аралашыу сәбәбенән иң ауыр маҡсаттар ҙа еңел табыла һәм бикле ишектәр асыла. Йомшаҡ һүҙҙәр күңелдәрҙе рәхәтләндерә. Ихлас һүҙ ҙур бүләктәрҙән артыҡ шатлыҡ килтерә. Асыҡ йөҙ һәм ябайлыҡ дуҫлыҡ һәм мөхәббәт дәлиле була. Шуның өсөн кем булһағыҙ ҙа булығыҙ, әҙәм балалары менән әҙәпле аралашығыҙ. Йомшаҡ һәм мөләйем һүҙле һәм ихласлы булығыҙ.

● Күңелһеҙ йәки асыулы ваҡытта халыҡ менән һөйләшмәй, асыуығыҙҙың ҡыҙыулығы һүрелгәнсе, сабыр итегеҙ. Кешеләргә ҡәмселектәрен гәфү итегеҙ, һәр эштә фекерле һәм иғтибарлы булығыҙ. Был иһә тәрбиәле булыуҙың билдәһе.

● Кешеләргә ҡатнашмай ситтә тормағыҙ, кем осраһа ла уның менән һөйләшеп, дуҫлыҡ күрһәтегеҙ. Һәр эштә гәҙел, хөр фекерле, раҫ һүҙле, баһадир, эстән дә, тыштан да бер булығыҙ.

● Кешеләрҙең уҫал мөнәсәбәтенә ҡаршы яҡшылыҡ итегеҙ, яҡшы мөнәсәбәтенә ҡаршы тағы ла артыҡ яҡшылыҡ итегеҙ. Башҡаларға күрһәтәсәк мөнәсәбәт, уларҙан күрергә теләгән мөнәсәбәттән тағы ла артыҡ дәрәжәлә яҡшы булырға тейеш.

● Үҙегеҙҙән кеселәрҙе түбән күрмәгеҙ. Аҡылығыҙ һәм байлығығыҙ менән маҡтанмағыҙ, мәртәбәгеҙҙе һәм башҡаларҙың мәртәбәһен яҡшы белеп, һәр кемгә яраҡлы аралашығыҙ, бер бөйөк заттың: "Барыһы ла яҡшы, беҙ яман", - тигән һүҙенән ғибрәт алығыҙ.

● Халыҡтан яҡшы мөнәсәбәт күрергә өмөт итһәгеҙ, үҙегеҙ уларға яҡшы булығыҙ. Уларҙан хөрмәт көтһәгеҙ, уларға хөрмәт күрһәтегеҙ. "Халыҡтың дошман булыуына ҡайғырмайым", - тимәйенсә, дуҫлыҡтарын яуларға тырышығыҙ. Аҡыл эйәләренең күңелдәрен үҙегеҙгә тарттырасаҡ рәүештә булығыҙ. Маҡсаттарығыҙҙы ҡатылыҡ һәм ҡурҡытыу менән түгел, мөхәббәт менән табырға тырышығыҙ. Халыҡҡа мөхәббәтле булыу сәбәбенән камиллығығыҙ юҡҡа сыҡмаҫ.

**(Дауамы бар).**

*БЕР ТЕМАҒА - ИКЕ СЫҒЫШ*

# БӘҒЗЕ ДӘРЕСЛЕКТӘР...

## сабый зиһенен сүп-сар менән тултыра

### Эй китабым, эй китап...

**Донъя менән аралашыу, уның барлыҡ тармаҡтарынан мәғлүмәт туплау өсөн заман технологиялары мөмкинлектәре иҫ киткес тиҙлектә арта бара. Олораҡ быуын кешеләренең байтағына был яңылыктарҙы үҙләштереүе еңел түгел. Балалар иһә, әле йүнләп уҡырға-яҙырға өйрәнмәҫтән, компьютерға йәбешә, тәүлектең әллә күпме сәғәтен уның менән уҙара. Әлбиттә, хәҙерге уҡытыу системаһындағы модернизация талаптарын үтәү өсөн педагогтарға яңы технологиялар ныҡ ярҙам итәсәк. Ләкин ниндәй генә шарттарҙа ла дәреслектәр барыбер уҡытыуҙың нигеҙе булып ҡаласаҡ, баланың ғилем донъяһына ышаныслы аҙымдары әсә телендәге әлифбанан башланасаҡ. Был бөйөк китап менән, унан һуң башҡа дәреслектәр менән танышыу кеше ғүмерендәге иң серле һәм иң бәхетле саҡтар булып күңелендә ҡаласаҡ.**

Ғабдулла Туҡайҙың бер шиғырында балаһына атай ошолай өндәшә:

*Яҙ, гәзиз уғлым, ҡара таҡтаны*
*һыҙ аҡбур менән!*
*Һәм ҡара күңелеңде ялт иттер*
*һыҙып аҡ нур менән!*

Хәҙер ҡара таҡта менән аҡбурҙы интерактив таҡталар ҡыҫырыҡлай, белем алыу процесын тиҙләштереүсе яңы мөмкинлектәр тыуа. Дистанцион уҡытыу алымдары тураһында ла йыш ҡына һөйләйҙәр. Сәләмәтлеге булмау арҡаһында мәктәпкә йөрөй алмаған балалар өсөн дистанцион уҡытыу, әлбиттә, бик ҙур мөмкинлектәр аса. Ғөмүмән, бәйләнештәрҙе киңәйтеү йәһәтенән бындай технологияларҙың әһәмиәте киләсәктә тағы ла артасаҡ. Ләкин уҡыусы менән уҡытыусы араһындағы йәнле бәйләнеште, дәреслектәрҙең тәьҫир көсөн иң заманса саралар ҙа алмаштыра алмаясаҡ. Хәҙерге уҡытыу системаһында балаға белем биреү менән уны тәрбиәле итеү араһындағы тәбиғи бәйләнеш етмәй, тәрбиәгә иғтибар кәмей. Дәреслек буйынса дәрес әҙерләп, уҡытыусы менән күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыуҙан тыш, балала юғары әхлаҡи сифаттар тәрбиәләүҙе ҡыйын буласаҡ. Дистанцион уҡытыуҙа бындай мөмкинлектәр ныҡ сикләнгән.

Бөгөнгө мәктәп һәм башҡа уҡыу йорттарындағы дәреслектәр менән халдәр нисегерәк тора һуң? Был һорау уҡытыусыларҙы ла, атаәсәләрҙе лә бик ныҡ борсой. Дәреслектәр һәм уҡыу-уҡытыу әсбаптары, төрлө методик ҡулланмалар хәҙер бик тиҙ үҙгәрә, һәр эштә үсеш туҡтауһыҙ тәжрибәләр үткәреү, төрлө яңылыҡтар индереү аша бара. Быныһы бәхәсһеҙ, быныһы йәшәйештәге алға китеүҙең үҙенсәлеге. Ләкин һуңғы ваҡытта педагогика өлкәһендә эксперименттар артыҡ күбәйеп китмәнеме? Ысынлап та, сабый зиһенен төрлө тәжрибәләр үткәреү өсөн үҙенсә полигонға әйләндереп бөттөләр түгелме? Әллә күпме варианттарҙағы дәреслектәр баҫып сығарыла. Улар ниндәй мәғариф белгестәре тарафынан раҫлана, балаларҙың психологик үҙенсәлектәренә тура киләме? Был һорауҙарға яуап эҙләй башлаһаң, әллә ниндәй шырлыҡтарға инеп аҙашырға мөмкин.

Тәжрибәләрҙең изге теләктән сығып эшләнгәнен, һис шикһеҙ, хуплаpға кәрәк. Әммә яман ниәт менән атҡарылған мәкерле эштәр ҙә етерлек. Шундай "хеҙмәттәр" нигеҙендә илдең тарихын боҙоп күрһәтеүсе, бөйөк рус әҙәбиәтен бик сикләп, тенденциоз рәүештә бәләкәсәйтеп сағылдырыусы дәреслектәр донъяға тыуа. Йәш быуынды тыуған ерлектән, халыҡсан нигеҙҙән ситләштереүсе яуыз әүрәткестәр үҙәк телевидение каналдары буйынса ла, интернет аша ла былай ҙа бит көнө-төнө ябырыла, сабый рухын яман сихыр менән сорнай.

Яңыраҡ РФ Дәүләт Думаһының Хәүефһеҙлек буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Владимир Колесников "Как нас пытаются лишить нашей истории" тигән мәҡәләһендә Рәсәй тарихын фальсификациялау тураһында бик борсолоп яҙып сыҡты. Ҡыҙыҡһыныусылар уның сығышын "Российская Федерация сегодня" тигән журналдан (2010, август) уҡый ала. Әле мин ошо мәҡәләнән бер генә миҫал килтерәм. 2009 йылдың аҙағында Рәсәй, ФРГ, АҠШ, Чехия, Италия, Франция, Бөйөк Британия, Швейцария, Латвия ғалимдарынан авторҙар төркөмө "История России. XX век" тигән ике томлыҡ баҫтырып сығарған. Уны әҙерләүселәр илебеҙ тарихын мәсхәрәләй, мыҫҡыл итә. Һуғыш осорона арналған бүлектә "Бөйөк Ватан һуғышы" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Бындай китаптар менән йәш быуынды Ватанға тоғро граждандар итеп тәрбиәләп булмаясаҡ.

Элекке осорҙарҙа әҙәбиәт, тарих йәки география буйынса дәреслектәрҙә генә түгел, хатта математика, физика һ.б. фәндәрҙә уҡытҡанда ла килтерелгән миҫалдар илгә һөйөү тәрбиәләй торғайны. Хәҙер улар сит ил тормошонан алынған мәғлүмәттәр менән тулған. Араларында туранан-тура боҙоҡлоҡҡа өндәүсе "үрнәктәр" ҙә бар. Шуларҙың береһе хаҡында мин элекке сығышымда әйткәйнем, тағы ла иҫкә төшөрәм. Мәктәп дәреслегендә бына ошондай текст бирелгән: "Ковбой Джо зашел в бар и попросил у бармена бутылку виски за 3 доллара, трубку за 6 долларов, 3 пачки табака и 9 коробок непромокаемых спичек, цену которых он не знал. Бармен потребовал с него 14 долларов 80 центов (в долларе 100 центов), на что Джо вытащил пистолет. Бармен пересчитал снова и исправил ошибку. Как Джо догадался, что бармен пытался его обмануть?" (Дорофеев Г. В., Петерсон Л. Г. Математика. 5 класс. Часть 1. Издательство "Ювента", 2006, стр. 124).

Заманында ун биш йәшлек Шәйехзада Бабич ошолай тигән:

*Эй китабым, эй китап,*
*миңә ҡыл һин хитап,*
*Һин генә башымдағы сүп-сарҙы*
*алырһың утап.*

Шағир бына шулай изгеләштергән тылсымлы рух шишмәһе китапты. Ә бөгөнгө мәктәптәрҙәге бәғзе китаптар сабыйҙың зиһенен яҡтыртаһы урынға, уны ағыулы сүп-сар менән тултыра. Хәҙерге уҡыусылар сит илдәрҙең төрлө ен-пәрей байрамдарын программа буйынса үткәреүҙә ҡатнаша. Әйтерһең дә, Рәсәй халыҡтарының үҙҙәренең матур йолалары юҡ.

Дәреслектәр һәм уҡытыу программалары тураһында махсус һөйләшеү, етди ғилми конференцияла фекер алышыу күптән кәрәк. Башҡорт әҙәбиәте һәм теле буйынса дәреслектәр ҙә ошондай иғтибарға мохтаж.

**Рауил БИКБАЕВ,**

**Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты.**

### Илһөйәрлек тәрбиәләмәгәс...

**Уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн дә төп методик аппарат - ул, әлбиттә, мәктәп дәреслектәре. Әммә ләкин бөгөнгө көндә уларҙың бик күп варианттары булыуы, йөкмәткеһе күп осраҡта бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡараштарҙы эсенә алыуы - ҙур проблема. Хатта китап магазиндары кштәләрендәге ҡайһы бер дәреслектәргә тейешле белеме булған уҡытыусылар ҙа аптырауға ҡалыр.**

Мәҫәлән, 5 кластар өсөн "Йәмғиәтте өйрәнеү" дәреслегендә кешенең барлыҡҡа килеүе тураһында ошондай фәнни ҡараш бирелә: "Примерно 10-12 млн. лет назад, в условиях жесточайшей засухи, часть крупных обезьян вынуждена была освоить прибрежную зону. Сначала они собирали моллюсков, рыбу и другие "дары моря". Со временем эти обезьяны стали заходить в воду все дальше от берега ...Спустя огромное количество лет от длительного пребывания в соленой воде эти обезьяны потеряли большую часть волосяного покрова... В силу каких-то, пока неизвестных причин некоторые обезьяны вернулись к сухопутному образу жизни. Другие же ... остались там навсегда и превратились в дельфинов...". Кем икән ул пеләш ҡалған маймыл нәҫелдәре тураһында яҙған авторҙар? Улар - педагогия фәндәре кандидаттары Е.С. Королькова һәм Н.Г. Суворова.

Икенсе бер тарих дәреслеген асайыҡ. Унда инде Икенсе донъя һуғышында 20 млн ҡорбан килтергән Советтар Союзы фашизмды еңмәгән, ә союздаш булған АҠШ

йә булмаһа Англия иң ҙур өлөш индергән булып сыға. Был дәреслектәрҙе ҡулға алғас та: "SOS! Ҡотҡарығыҙ балаларҙы!" - тип ҡысҡырырға ғына ҡала. Сөнки был дәреслектәр хәҡиҡәткә тура килмәй генә түгел, илһөйәрлек, халҡыбыҙҙың үткәне менән ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләмәй.

Совет осоронда белем биреү системаһының төп социаль заказсыһы булып дәүләт тора ине. Ул әхлаҡи, рухи ҡиммәттәрҙе билдәләне, белем биреүҙе ошо ҡиммәттәргә ярашлы ойоштороҙо, мәктәптәргә берҙәм талаптар ҡуйҙы, дәреслектәр баҫтырҙы. Бөгөнгө көндә мәктәптә тарихтан белем биреү йөкмәткеһенә дәүләт контроленән тыш, көслө йәмғиәт контроле лә булдырыу яҡшы булыр ине.

Һуңғы йылдарҙа дәүләт тарафынан тарих, йәмғиәтте өйрәнеү фәндәренә иғтибар артты, базис пландарында сәғәттәрҙең артыуы ла быны иҫбатлай. Был бик яҡшы күренеш. Шулай ҙа яңы дәүләт стандарттарында баҫым фактик материалды үҙләштереүгә яһала. Ә бөгөнгө инновацион иҡтисад уҡыусынан белем менән бер рәттән, уны анализлау, тәнҡитле фекер йөрөтөү, үҙ баһаһын биреү, тәжрибәһен тормошта ҡуллана белеүҙе талап итә. Стандартҡа ярашлы, Боронғо Грецияны өйрәнеүгә 5 сәғәт, Боронғо Римға - 3 сәғәт, ә илебеҙҙең иң боронғо осорона 1-2 сәғәт бирелә. Һорау: беҙҙең балалар үҙҙәренең ата-бабаларының боронғо донъяуи ҡараштарынмы, әллә грек һәм римлыларҙыҡын яҡшыраҡ беләме икән?

Уҡытыусыларҙың профессиональ кимәлен БДИ - Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре күрһәтә, тибеҙ. Әммә ләкин мәктәп дәреслектәренең береһе лә тулы ғына түгел, хатта уртаса кимәлдә лә имтиханға әҙерләнерлек материалды тәшкил итмәй. Бында тик юғары уҡыу йортона әҙерләгән дәреслектәр ярҙамға килә, әгәр бала уны үҙләштерә алһа әле. Тестың А һәм В өлөштәрен төҙөүселәр бер аҙ ҡараһын ине: был һорауҙарҙа тәҡдим ителгән 4 яуаптың икеһе дөрөҫ булған осраҡтар ҙа бар бит.

Уҡытыусының педагогик кимәлен БДИ һөҙөмтәләре генә түгел, үткәрелгән диагностик эштәр, олимпиада һәм конкурстар ҙа күрһәтә. Был йәһәттән үҙебеҙҙең районда 1-се һанлы Асҡар, Таһир Күсимов исемендәге гимназия, Ишҡол, Ташбулат, Таштимер, Дәүләт, Күсем мәктәптәренең күрһәткестәре юғары булды, һәләтле балалар менән индивидуаль эш алып барыу, уларҙы үстереү һуңғы йылдарҙа республика олимпиадаларында призлы урындар яулауға килтерҙе. Әлбиттә, профессиональ белем кимәлен, педагогик оҫталыҡты үстереү уҡытыусының үҙ эшенә ҡарашынан да тора. Шуға ла һөнәребеҙҙең бөсөн төшөрмәй, булып торған реформа-үҙгәрештәр алдында баҙап ҡалмай, һәр кемебеҙ үҙ урыныбыҙҙа үҙ эшебеҙҙе эшләйек, тип әйтмәксемен.

**Гөлниса МӘХИЙӘНОВА,**

**Әбйәлил районы Ишҡол урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы.**

*АТАЙ ҺҮҘЕ*

# НӘСИХӘТ КЕНӘ ҺӨЙЛӘМӘ,

## яҡшы өлгөнө үҙең күрһәт

**ҺОРАУ: "Атайығыҙҙан ниндәй ир тәрбиәһе алдығыҙ, улығыҙға ниндәй ир тәрбиәһе бирәһегеҙ?"**

Атайым Сәлимйән Ғәлләм улы оҙаҡ йылдар Темәс ауылы хакимиәте башлығы, урта мәктәп директоры вазифаларын намыҫлы башҡарҙы. Беҙҙең ғаиләлә атайҙың абруйы бик юғары булды. Унын үҙ-үҙен тотошо, башҡарған эштәре лә ошондай абруй тыуҙырғандыр. Тәрбиә мәсьәләһендә, беренсенән, атайыбыҙҙың беҙҙең өсөн ваҡытын йәлләмәүен, икенсенән, эшкә өйрәтеүен һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Өйгә бик кисләтеп кенә ҡайта ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең менән аралаша, уйнай, уңыштарыбыҙға ҡыуанып, артабан дәртләндерер булды. Иллә мәгәр, уңышһыҙлыҡтарыбыҙ өсөн дә битәрләмәне. Табын артында ла төрлө темаларға фәһемле һөйләшеүҙәр үткәрә торғайны. Беҙҙе уҡырға, белем алырға өндәне.

Беҙ ғаиләлә өс бала - Альберт ағайым, Милә апайым һәм мин. Ҡул араһына инеү менән барыбыҙға ла көндәлек эштәр бүлеп бирҙе атайыбыҙ. Мәҫәлән, бәрәү һыйырҙарҙы, бәрәү башмаҡтарҙы, ә кемдер ҡаҙҙарҙы тәрбиәләй. Эшкә бер ваҡытта ла әрләп ҡушманы. Бар нәмәне лә үҙ ваҡытында теүәл үтәргә тырыштыҡ. Атайыбыҙ өйгә ҡайтһа, беҙ, ҡыуанып, көн эсендә булып үткән яңылыҡтарҙы уға һөйләргә ашығабыҙ. Хеҙмәткә талпынып тороуыбыҙҙың ике сәбәбе бар: ҡушһа, төбәп әйтмәй, уратып ҡына аңғарта торғайны. Шуны үҙебеҙ аңлап, ҡыҙыҡһыныу менән тотоноп китә инек. Тағы ла: яратҡан атайыбыҙ хуплау һүҙҙәрен бер ҡасан да йәлләмәне. Сөнки ул - киң күңелле кеше. Был - икенсе сәбәп.

Ата-әсәйебеҙ мәктәптәге уңыш-ҡаҙаныштарыбыҙ өсөн ҡыуанып торҙо. Һәр ваҡыт әҙәби әҫәрҙәр уҡырға өндәнеләр. Уҡыуға, белем алырға тырышыу - белемле атайыбыҙ һәм әсәйебеҙ өлгөһөндә формалашҡан һыҙат. Шуғалыр, барыбыҙ ҙа юғары белем алдыҡ.

Ҡатыным Гүзәл менән ике бала үҫтерәбеҙ. Улыбыҙ Азамат Өфө дәүләт нефть-техник университетының 4-се курсында, ҡыҙыбыҙ Наҙгөл мәктәптә 3-сө синыфта уҡый. Ҡалала бала тәрбиәләү барыбер ауылдағы кеүек түгел. Иң төп айырма - хеҙмәт менән тәрбиәләү мөмкинлеге юҡ. Шуға күрә, беҙ балаларҙы спортҡа ылыҡтырҙыҡ. Һаулыҡ өсөн иң файҙалыһы - йүгереү. Спорт холоҡто ла тәрбиәләй. Бала бәләкәйҙән тырыш булһын тиһәгеҙ, уның күңелендә ярыш сәме уятырға кәрәк. Беҙ, мәҫәлән, дуҫтарҙың, таныштарҙың яҡшы уңыштарға өлгәшкән балалары тураһында һөйләп, улар менән таныштырабыҙ. Бәләкәй бала, тырышып, маҡсаттарына һуҡмаҡ һала, киләсәккә йүнәлеш ала. Азамат улыбыҙ беҙҙе уҡыуындағы уңыштары менән ҡыуандыра. Киләсәктә фән юлынан китер, тигән өмөт бар.

Балаларҙы нәсихәттәр һөйләп кенә тәрбиәләмәйбеҙ. Улар беҙҙең йәшәү рәүешебеҙгә ҡарап, үҙҙәре фекер йөрөтөп, үҙҙәрен нисек тоторға өйрәнергә тейеш, тип уйлайбыҙ. Бөгөнгө көндә киң мәғлүмәт сараларында ла кире күренештәр йыш яҡтыртыла. Наркоманлыҡ, эскелек, тәмәке тартыуҙың кире яҡтары тураһында балаларыбыҙ хәбәрҙар. Әсәләренең педагогика фәндәре кандидаты булыуы ла ҙур роль уйнай. Ул - Сибай институтының педагогика факультеты психология кафедраһы мөдире. "Этнопедагогика нигеҙҙәре" темаһына диссертация яҡлаы. Шуға күрә беҙҙең ғаиләлә рухи тәрбиә - беренсе урында.

Ауылға йыш ҡайтыуыбыҙ балаларҙың рухи тамырҙарҙан көс алыуына булышлыҡ итә. Олаталары һәм өләсәләре менән аралашыу уларҙы үстерә, күңелен байыта. Беҙҙең ата-әсәйебеҙгә булған ихтирамыбыҙҙы күреү үҙе үк яҙылмаған ҡанундар менән танышыу сараһы.

**Азат ВӘЛИЕВ,**

**техник фәндәр кандидаты, доцент.**

**Сибай ҡалаһы.**



*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# ӨР-ЯҢЫ БАҪМАЛАР

**Бөгөн йәмғиәттә суверенитет мәсьәләһенә ике төрлө ҡараш йәшәй. Беренсеһе - "уның бер ниндәй ҙә кәрәге юҡ ине"; икенсеһе - "кәрәк ине, һәм ул бөгөн дә кәрәк". Был ике фекерҙең аҙаҡҡыһы, әлбиттә, башҡорт рухлы халыҡ фекере. Ә шулай ҙа мәсьәләгә объектив мөнәсәбәт кәрәк.**

Иҫебеҙгә төшөрәйек, үткән быуаттың 90-сы йылдар башында үҙаллылыҡ өсөн йәйелдерелгән ижтимағи-сәйәси хәрәкәт ҡырҡыу төҫ алды. Ошондай уҡ хәл Башҡортостанда ла күҙәтелде. Башҡорт халҡы быуаттар буйы үҙаллылыҡҡа, азатлыҡҡа ынтылған һәм, тәбиғи, Башҡортостан Республикаһы беренсе сиратта суверенитет яуланы. "Башҡортостанға үҙаллылыҡ!" тигән лозунгының асылын халыҡҡа аңлатыу талап итэлде. Был оло бурысты бары тик милли матбуғат баҫмалары булдырып ҡына тормошҡа ашырырға мөмкин ине.

1989 йыл аҙағында "Ленинец" гәзитенең башҡортса тәржемә варианты урынына үҙаллы "Йәшлек" гәзитен сығара башлау Башҡорт илен йоҡонан уятып ебәргәндәй тәьҫир итте. Халҡыбыҙҙа яҡты киләсәккә өмөт, ышаныс уянды.

1990 йыл башынан алып суверенитет яуланған 11 октябргә тиклем "Йәшлек" башҡорт йәштәр гәзите үҙ иңенә оло бурыс алып, халҡыбыҙҙы үҙаллылыҡ идеяһы тирәһенә туплауға, милли хәрәкәттә әүҙемләштереүгә ҙур өлөш индерҙе.

Башҡортостан Республикаһының дәүләт үҙаллылығы тураһында Декларация ҡабул ителгән көн һис тә тарих туҙанына күмелергә тейеш түгел. Был тарихи көнгә халҡыбыҙҙың үҙаллы тормошҡа булған ынтылышы ла, мәҙәни-рухи күтәрелеше лә, туған телебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡлап ҡалыу теләге лә тығыҙ бәйле.

"Суверенитет нимә бирҙе һуң?" тип, өлгәшелгән ҡаҙаныштарҙы күнеле, күҙе һуҡыр ғына күрмәүе ихтимал. Былдай оппозиционерҙарға шулай тип әйтер инем мин: 20 йыл үҫеш дәүерендә суверенитет башҡорт халҡына ғына түгел, ә бөтә Башҡортостан, уның күп милләтле халҡы өсөн дә ҡаҙаныштар килтерҙе. Шуға күрә лә беҙҙең бөгөнгө бурысыбыҙ 20 йыл элек башланған ҙур эштәргә ғәҙел баһа биреү, барлыҡ өлгәшелгән уңыштарҙы һаҡлап ҡалыу. Бөгөн беҙ ерҙе һатыуҙы туҡтатыу, башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен бермә-бер киңәйтеү, эшҡыуарлыҡты, кәсепселекте, фермерлыҡты үҫтереү буйынса ныҡышмалыраҡ аҙымдар яһарға тейешбеҙ.

**Сәлим БУЛАТОВ,**

**журналист.**

***✓ Беҙ атлы, бал ҡортло, ҡымыҙлы, баллы халыҡ. Шәхси милкебеҙҙә заводтар, миллиард һумдар булмаһа ла, ошо ҡиммәттәребеҙ менән үтә лә байбыҙ. Матди байлыҡҡа ҡарағанда ҡиммәттәр мәңгелек булыуы менән ҡиммәтлерәк.***

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм ХӘМИТОВ "Башҡорт балы", "Башҡорт аты", "Бөрйән бал ҡорто", "Башҡорт ҡымыҙы" кеүек традицион башҡорт брендтарын республикаға рәсми беркетергә һәм уларға тейешле сертификаттар булдырырға, тигән тәҡдим индерҙе. Бик хуп. Республика башлығының был тәҡдимен тәүгеләрҙән булып "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор Әмир ИШЕМҒОЛОВ менән "Аҡбуҙат" ипподромы дәүләт унитар предприятиеһының баш ветеринария табибы Халис КИЛДЕҒОШОВ күтәреп алды. Һеҙҙең иғтибарға уларҙың әңгәмәһен тәҡдим итәбеҙ.**

# БАЛ ҠОРТОБОҘ, БАЛЫБЫҘ, АТЫБЫҘ,

## Уларҙы һаҡлау



**‣ Һеҙ умартасылыҡ һәм йылҡысылыҡ өлкәһен яҡшы аңлаған белгестәр булараҡ, ошо ҡиммәттәребеҙҙең брендтарын республикаға рәсми рәүештә беркетеүҙе нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Президенттың был тәҡдиме бик актуаль. Беренсенән, бренд булдырыу тарихыбыҙҙы өйрәнеү, милли традициябыҙҙы, йәшәү рәүешебеҙҙе аяҡҡа баҫтырыу булһа, икенсенән, "Башҡорт балы", "Башҡорт аты", "Бөрйән бал ҡорто", "Башҡорт ҡымыҙы" брендтарын булдырыу милләтебеҙ, республикабыҙ иҡтисадын да яңыса ойоштороуға, бигерәк тә ауыл халҡының социаль хәлен яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк. Ил буйынса ҡоролоҡ булыуға ҡарамаҫтан, быйыл ҡайһы бер умартасылар 1-әр миллион һумлыҡ бал етештереүгә өлгәште. Ошоно 10 айға бүлгәндә лә айлыҡ килем 100 мең һумды тәшкил итә. Йылҡы тотоусылар миңә үпкәләмәһен, быйыл, мәҫәлән, ҡайһы бер райондарҙа ҡолонло бейәне 20 меңгә һаталар. Умартасы өсөн 20 мең - ул бер фляга бал. Ә ҡолонло бейәне ҡарау бер фляга бал йыйыуға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ. Етмәһә, бөгөн балға ҡарағанда итте һатыуы ла ауырыраҡ. Әле "Ҡортсолоҡто үҫтереү - ауылдың социаль үҫеше" программаһы өҫтөндә эшләйем. Башҡортостанда бөгөн 300 мең күс бал ҡорто иҫәпләнә. Ә республикабыҙҙың тәбиғи мөмкинлеге буйынса 1 миллион 345 мең күс тоторға һәм бер миҙгелдә 335 мең тонна бал етештерергә, йәғни әлеге етештерелгәндән балдың күләмен 10-15 тапҡырға арттырырға була. Ә Рәсәйҙә был күрһәткес - 53 мең тонна ғына. Бөгөн ауылда республикабыҙ халҡының 40 проценты йәшәүен иҫәпкә алғанда, һәр бер кеше 1-әр оя бал ҡорто тотоп, үҙенең көнкүрешен ойоштора ала. Быйылғы ҡоролоҡ йылында йүкә ағасы 2-3 көн һуҙымында ғына бал бирҙе. Ошо 2-3 көн эсендә генә ҡайһы бер умартасылар тонналап бал йыйып өлгөрҙө. Әгәр ҙә, ғәҙәттәгесә, 12 көн буйы бирһә...

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Президенттың был тәҡдимен бик хуплайым. Һуң булһа ла, уң булһын. Беҙ күп осраҡта бик яҡшы башланғысты башлайбыҙ ҙа, аҙағына тиклем еткермәй, ташлап та ҡуябыҙ. Был эш менән дә шулай килеп сыҡмаһын ине.

Башҡортостанда йылҡысылыҡты үҫтереү буйынса программалар күп ҡабул ителде, әммә Башҡорт аты менән Башҡорт ҡымыҙына, Башҡорт бал ҡортона һәм Башҡорт балына бер юлы быңдай иғтибар булғаны юҡ ине. Беҙ атлы, бал ҡортло, ҡымыҙлы, баллы халыҡ - бай халыҡбыҙ. Шәхси милкебеҙҙә эре-эре заводтар, миллиард һумдар булмаһа ла, ошо ҡиммәттәребеҙ менән үтә лә байбыҙ. Матди байлыҡҡа ҡарағанда ҡиммәттәр мәңгелек булыуы менән ҡиммәтлерәк. Кешелек йәшәйешендә ҡайһы халыҡтың аты булһа, шул халыҡ еңелмәҫ булған. Тик атлы халыҡ ҡына үҙен халыҡ итеп тойған. Беҙҙе боронғо дәүерҙәрҙән алып донъяға башҡорт итеп танытыусы - ул ат. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ әле башҡорт атына бер һәйкәл дә ҡуймағанбыҙ. Бер хорват егете миңә: "Һеҙ ниндәй ғорурлана белмәгән халыҡ ул, беҙ хатта үҙебеҙҙең этебеҙҙе һауаға күтәреп маташабыҙ, ә һеҙ данлыҡлы атығыҙға һәйкәл дә ҡуя алмайһығыҙ", - тине. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: әгәр ҙә Салауат батырыбыҙҙың һәйкәле атһыҙ булһа, уның бәҫе кәмегән һымаҡ тойолор ине. Был нимәгә шулай тойола? Сөнки башҡорт менән ат икеһе бер бөтөн төшөнсә. Ниндәй генә халыҡ йырын алып ҡарамайыҡ, унда "ат" һүҙһеҙ оҙон көйөбөҙ юҡ кимәлендә: "Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы...", "Яҡшы атҡа менеп ҡулына алған уҡһаҙаҡҡай тигән ҡоралын...", "Аҫтындағы эйәр атҡа тейәр...", "Атым бар, йүгәнем юҡ...", һ.б. Рәсәй территорияһында тик башҡорттар ғына атлы халыҡ булған. Башҡорттар Һундар ғәскәрендә, Алтын Урҙаға ҡаршы һыбай көрәшкән, Парижға ла атта барып ингән, Санкт-Петербургты ике тапҡыр атлы башҡорт (тәүгеһендә - поляктарҙан, икенсеһендә - Юденичтан) һаҡлап ҡалып, ғәмәлдә, Рәсәйҙе ҡотҡарған. Бөйөк Ватан һуғышында ла атлы башҡорттар танк корпусына ҡаршы барып, донъяның хәрби подразделениелары араһында иң күп геройҙар биргән дивизия төҙөгән. Тарихтан билдәле булыуынса, меңәр йылдар буйына йәйәүле Рус армияһында ла кавалерия башҡорт аттары нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Ҡараһаҡал яуы тоҡаныуының бер сәбәбе - "штраф аттары йыйыу" һылтауы менән 30 мең баш башҡорт атын талап алыу ҙа тора.

Көньяҡ Башҡортостанда "талмаҫ ҡымыҙ" тигән төшөнсә бар. Яһай белеп эшләнгән ҡымыҙҙы шулай атайҙар. Талмаҫ ҡымыҙҙы урман араһындағы үләнде ашаған бейә һөтөнән яһап булмай, бының өсөн фәҡәт ҡылған кәрәк. Ҡылған ҡымыҙы тиҙ генә артамай йәғни әсеп бармай һәм ул оҙаҡ һаҡлана. Әсегән ҡымыҙҙы тағы ла "ҡырҡылған ҡымыҙ" тип тә атайҙар һәм ундай ҡымыҙҙы эсеүе лә ҡыйын. Башҡорт ҡымыҙы башҡа халыҡтарҙың ҡымыҙынан бейә ашаған үлән менән дә, уны эшләү тәртибе менән дә айырыла. Һуңғы ваҡытта Ауыл хужалығы министрлығы төрлө конкурстар үткәреп, уларҙа төрлөсә ысул менән яһалған ҡымыҙ тәҡдим итә башланылар. Бик хуп. Әммә бында, ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығарыуҙар ҙа юҡ түгел, йәғни төрлө яһалмалыҡтарға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Ә бына боронғоса традицион ҡымыҙ яһау ысулдары тергеҙелеүе мотлаҡ. Бейә һөтө әсә һөтөнә иң яҡын һөт булып иҫәпләнә. Шуға күрә башҡорт ҡымыҙының брендын эшләгәндә бейә һөтөнән аҡһымға бай балалар ризығы яһау мәсьәләһе лә үҙәк урынға ҡуйылһа, киләсәктә был йүнәлеш иҡтисадта үҙ-үҙен аҡлар ине.

Ҡаҙылыҡ эшләүгә килгәндә, көньяҡ Башҡортостанда яһалған ҡаҙылыҡ башҡа яҡтарҙыҡынан ныҡ айырылһа ла, традицион булыуы менән үҙенсәлекле. Башҡорттар борон-борондан йылҡы малын һоло ашатмайса ғына тибендә йөрөтөп һимертә лә белгән.

Хәҙерге көндә йылҡы малы иң күбе Баймаҡ районында иҫәпләнә - 9 меңгә яҡын баш, Учалы районында - 7,5 мең, Әбйәлилдә - 6,5 мең баш. Ә республика буйынса 159 мең баш йылҡы малы иҫәпләнә. Башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеү менән Йылҡы заводы һәм Дәүләт завод ат һарайы шөғөлләнә. Быларҙан тыш, бер нисә тоҡомсолоҡ хужалыҡтары бар. Баймаҡ районында "Ирәндек" тоҡомсолоҡ хужалығы төҙөү ҡаралған. Был йүнәлештә республикала эш алып барыла, ә бына Әмир ҡусты Башҡорт бал ҡортона патент юллаған кеүек, Башҡорт атына һәм Башҡорт ҡымыҙына паспорт юллау бурысы беҙҙең алда тора.

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Зоотехник булараҡ, йылҡысылыҡҡа бәйле фекерҙәремде лә әйтеп үтәйем. Ҡымыҙ етештереүсе күп халыҡтар уны "ҡымыҙ" тип атай. Шуға күрә Башҡорт ҡымыҙының патентын эшләү өсөн тиҙ арала уның башҡа халыҡтарҙыҡынан айырмалы сифаттарын билдәләргә кәрәк. Башҡорт ҡымыҙын эшләү өсөн башҡорт бейәләрен Францияға ла сығарып ҡаранылар, тик үләнебеҙҙе сығармағас, унда башҡорт ҡымыҙын яһай алманылар. Башҡорт балының үҙенсәлеге Уралтауҙың үләне менән билдәләнһә, башҡорт ҡымыҙы ла ҡылғанлы үлән менән үҙенсәлекле. Ҡымыҙҙан тыш, беҙгә балалар өсөн диетик аҙыҡтар эшләй башларға ваҡыт. Ҡымыҙҙы сит илгә сығарыр өсөн бейә һөтөн киптерергә өйрәнергә лә кәрәк. Беҙ сит илгә сыҡҡанда йылҡы итенән эшләнгән башҡорт ризыҡтарының нисек популяр икәнен күрәбеҙ, шуға күрә ниңә уларҙы тағы ла сифатлыраҡ итеп әҙерләп, сит илгә һатырға сығармаҫҡа һуң?

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Аттың тән температураһы кешенекенән бер градусҡа юғарыраҡ. Шуға күрә аттан йылы алыу кешене һәр ваҡыт йылы тотҡан.

Ирҙәрҙең енес ауырыуҙары ла элек шуға булмаған. Йылҡы итен, ҡаҙылыҡ, ял ашау ҙа шундуҡ тәнде йылытып ебәрә, был ризыҡтарҙы ҡабул иткән кешенең сикәһе һәр саҡ алһыуланып тора. Башҡорт өсөн иң ҙур яза элек аттан төшөрөп, йәйәү атлатыу булған. Йәйәүле башҡорт өс саҡрымдан да алыҫ китә алмаған.

***Мин тарихсыларға: "Әйҙә, үҙебеҙҙең Башҡорт бал ҡортон һаҡлап ҡалайыҡ. Меңәр йылдар буйына бер ниндәй ҙә Рус ҡорто беҙҙең ергә инмәгән, халҡыбыҙ кеүек үк Башҡорт бал ҡорто ла Уралыбыҙҙы бирәүгә лә бирмәгән, суверенлы булған", - тип мөрәжәғәт иттем. Шунан һуң Рус ҡорто менән Башҡорт ҡортон алып, микроскоптар аша тикшерә башланыҡ. Уларҙың айырмалыҡтарын билдәләнек, айырмалыҡтарын билдәләүҙең методикаһын яҙҙыҡ. Таблица төҙөнөк һәм Рәсәй ерендә беренсе булып тоҡомдо билдәләүҙең положениеһын эшләнем, кандидатлыҡ диссертацияһы эшем дә шуға арналды. Документтар әҙер булғас, Мәскәүгә комиссияға бирҙем. Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы комиссияһы минең документты йыл ярым буйы тикшергәндән һуң, академиктарға бирҙе. Мин шул академиктар алдында Башҡорт бал ҡорто тоҡомон иҫбатлап сығарып, 2006 йылда Башҡорт бал ҡорто айырым тоҡом булып иҫбатланды. Рус бал ҡорто һәм Рәсәйҙәге тағы ла ете төрлө тоҡомдоң бер ниндәй ҙә документы, патенты юҡ, ә Башҡорт бал ҡортоноң үҙ паспорты бар.***

**‣ Элек бай кешенең өйөр-өйөр йылҡыһы, батман-батман балы булған. Ә бына**

***✓ Юнысбаев Сабырйән ауылыбыҙҙың барлыҡ йылҡы малын өйөргә туплап, ҡымыҙ яһап, кем атын биргән, шуларға түләп, шул уҡ ваҡытта үҙҙәренә эсергә ҡымыҙ биреп, Баймаҡ тирәһендәге юлдарҙа ҡымыҙ менән һатыу итә.***

# Ҡымыҙыбыҙ...

## үҙебеҙҙе лә һаҡлау буласаҡ

**хәҙерге заман күҙлегенән "Йылҡы малы һәм умарта тотҡан кеше ярлы түгел, бай була"тигән фекерҙе нисек аңлатырға була? Ғөмүмән, бал ҡорто, йылҡы малы тотоп байып буламы?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Умартасылар бер ваҡытта ла ярлы йәшәмәгән. Минең ҡартатайым ауылыбыҙҙан 300 саҡрымдан ашыу алыҫлыҡта ятҡан Магнитогорскиға ат менән йөрөп, бал менән һатыу иткән. Ҡулына ингән аҡсаһына кейем-һалым, башҡа тормош кәрәк-ярағы тейәп ҡайтыр булған. Быйыл атайымдар картуфлығынан 5 тоҡ ҡына картуф ҡаҙып алды. Был яҙғыһын сәсер өсөн етерлек кенә уңыш. Тимәк, ҡыш буйы ашарлыҡ картуф юҡ, тигән һүҙ. Ошондай шарттарҙа ауыл кешеһе һис юғы бер-ике күс ҡорт тотһа, картуфын да, башҡаһын да һатып алырлыҡ аҡса эшләй алыр ине. Шуға күрә быйылғы ҡышта ҡайһы бер ғаиләләр аслыҡ кисерһә, һис тә аптырарлыҡ хәл булмаясаҡ.

Аттарға килгәндә, быйылғы кеүек бесән-һалам наҡыҫ йылда фәҡәт башҡорт аты беҙҙе аслыҡтан да ҡотҡарырға һәләтле. Башҡорт аты йыл әйләнәһенә үҙ-үҙен ҡарай, аҫырай алырлыҡ мөғжизә. Шуға күрә беҙгә атыбыҙҙың, ҡымыҙыбыҙҙың, бал ҡортобоҙҙоң, балыбыҙҙың брендын булдырып, иғтибарыбыҙҙың 70 процентын милләтебеҙ иҡтисадына йүнәлдерергә кәрәк.

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Әгәр ҙә беҙҙең республикала туризм, курортология үҫеш ала икән, бөгөн һәр бер курорттың эсеп туйғыһыҙ ҡымыҙы булһын. Урал армыттары буйлап туристарҙы йөртөү өсөн дә ат кәрәк. Былтыр Башҡортостанда барлығы 2,5 мең тонна ҡымыҙ етештерелгән. Беҙҙең ауыл кешеһе Юнысбаев Сабырйән ауылыбыҙҙың барлыҡ йылҡы малын өйөргә туплап, ҡымыҙ яһап, кем атын биргән, шуларға түләп, шул уҡ ваҡытта үҙҙәренә эсергә ҡымыҙ биреп, Баймаҡ тирәһендәге юлдарҙа ҡымыҙ менән һатыу итә. Бының менән ул бөгөн ете ауылдашымды эшле-ҡымыҙлы-аҡсалы иткән. Бындай башланғыс һәр бер ауылда булһа, һүнеп барған ауылды күтәреү өсөн ҙур этәргес булыр ине. Хатта киләсәктә ауыл хужалығын ошо йүнәлешкә ҡорорға ла була. Ауылды һаҡлап ҡалырлыҡ идея ла ята бында. Шул уҡ ваҡытта Сибай ит комбинатында йылҡы итенән һәм һөтөнән яһалған сифатлы ризыҡтар Мәскәү һәм донъя баҙарында һатылһа, иманым камил, ауылдарыбыҙ күтәрелер ине. Һуңғы осорҙа был инициативаны беҙҙең ҡулдан башҡалар тартып ала. Тверь өлкәһе, Татарстан Республикаһы һуңғы осорҙа бик күп башҡорт аттарын һатып ала башланы. Мәскәүҙә башҡорт аттары ҡымыҙы "Татар ҡымыҙы" тип һатыла, мәсеттәр янындағы хәләл иттәр ҙә барыһы ла Ҡаҙандыҡы. Башҡорт аты әлеге ваҡытта ауырлығына ҡарап, ит хаҡы менән генә йөрөй, әгәр ҙә инде уның паспорты, патенты булһа, хаҡы ла байтаҡҡа күтәрелер ине.

Башҡорт атын һәм унан етештерелгән продукцияны донъя баҙарында юғары хаҡҡа һатыу өсөн дә уны бренд кимәленә күтәреү мотлаҡ. Үкенескә ҡаршымы, бәхеткә күрәме, беҙгә баҙарҙа әйберҙең хаҡын арттырып һатыу ғәҙәте бирелмәгән. Был беҙҙең башҡа таш менән һуҡҡан кеүек. Үзбәктәр, татарҙар һатыу итеүҙе еңел үҙләштерә. Беҙ иһә һатып биреүгә ҡарағанда, бүләк итеп биреүҙе өҫтөнөрәк күрәбеҙ. Дуҫлыҡ төшөнсәһе беҙгә ғәзизерәк."Әйттем. Бирҙем. Булды" тигән ҡанун беҙгә яҡынырақ.

**▸ Башҡорт бал ҡорто, Башҡорт аты тигәндә, беҙ иң тәүҙә уларҙың башҡаларҙан айырмалы үҙенсәлегенә иғтибар итәбеҙ. Беҙҙенсә, уларҙың брендтарын булдырғанда ана шул үҙенсәлектәре төп сифат итеп алынырға тейештер ҙә...**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Башҡорт бал ҡорто күсе көнөнә 15 килограмм бал бирергә һәләтле. Кавказ тоҡомло ҡорт күсе 7 килограмдан арттыра алмай. Күреүегеҙсә, ике оя Кавказ бал ҡорто тотҡансы, бер күс Башҡорт бал ҡорто тотоу уңайлы. Башҡорт бал ҡорто меңәр йылдар буйы беҙҙәге һауа торошона ныҡ ҡулайлашҡан һәм тиҙ арала күп кенә миҡдарҙа бал йыйып ала. Быйыл йәй эҫелек 35-40 градусҡа барып етте. Ә башҡорт бал ҡорттары эҫегә лә, һыуыҡҡа ла, ел-ямғырға ла, буран-дауылға ла бирешмәй. Ҡыҫҡаһы, Башҡорт бал ҡортон үҙебеҙҙә генә түгел, Рәсәйҙең 60-70 процент ерендә үрсетергә була. Быйыл Новосибирск өлкәһендә 50 процент ҡорттар һәләк булған. Белешһәк, улар Кавказ бал ҡортон үрсетә икән. Мин Себерҙә тик Башҡорт бал ҡорто ғына үрсеүгә һәләтле икәнен иҫтәренә төшөрҙөм. 2004 йылда Санкт-Петербургҡа күргәҙмәгә барғанда беҙ "Башҡорт һырғанаҡ балы", "Башҡорт каштан балы" тигән марка менән бал һатҡан кешеләрҙе күрҙек. Уларҙан алған балды тикшереп ҡараһаҡ, тауарҙарының башҡорт балы менән һис бер уртаҡлығы булмауын аңланыҡ. Шунан һуң республикабыҙҙың һәр төбәгендә йыйылған балдарҙы тикшереп, лаборатор анализдар үткәреп, Башҡорт балының үҙенсәлеген билдәләп, Мәскәүҙә "Башҡорт балы"ның патентын юлланыҡ һәм уны алыуға өлгәштек. Бының менән беҙ Башҡорт балы тирәһендә монополия төҙөргә теләмәнек, ә бары тик ҡулланыусыға "Башҡорт балы" маркаһы менән тик үҙебеҙҙең балдың ғына барып етеүен теләнек. Юғиһә, үзбәк балының килоһын 150 һум менән һатып алалар ҙа, Башҡорт балы, тип, 400 һумға һатып йөрөүселәр ҙә бар донъя баҙарында. Беҙ әле Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта унлаған фирманы судҡа бирҙек һәм әлегә беҙҙең ярлыҡ менән һатыу итеүсе биш фирманың был йүнәлештәге эшмәкәрлеген туҡтата алдыҡ. "Башҡорт балы" тигән һүҙҙе беҙ һаҡлап ҡалдыҡ һәм үҙ эшебеҙҙе ошо йүнәлештә дауам итәбеҙ.



**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Мин башҡорт атының сыҙамлығын башҡорттоң сыҙамлығы менән параллель ҡуям. Был осраҡта беҙҙең халыҡта "Мал хужаһына оҡшай" йә "Хужа малына оҡшай", тип әйтәләр. Башҡорт сыҙамлы, әммә сыҙамлығының сигенә еткәндә генә ул атҡа атлана. Аҫтындағы аты һыуынмайынса, башҡорт та һыуынмаған. Атһыҙ егеткә хатта ҡыҙ ҙа ҡарамаған, ул кәләш тә ала алмаған. Башҡорт өсөн ат - ул ер менән күкте бәйләүсе зат. Атҡа менгән кеше шундуҡ ер менән йыһан бәйләнешен тойған. "Ете мөғжизә" конкурсы үткәрәләр үткәреүен, әммә башҡортто халыҡ иткән Башҡорт аты исемлектән, ниңәлер, төшөп ҡалды. Әлбиттә, мөғжизәләребеҙ күп, әммә атыбыҙ булмаһа, беҙ хәҙерге көнгә килеп етә алмаған булыр инек. Хәҙер кемдең ракетаһы бар, шуның менән иҫәпләшәләр, элек кемдең аты булған, шуның менән иҫәпләшкәндәр. Октябрь революцияһынан һуң башҡорттар, Рәсәй империяһында үҙ ғәскәрен төҙөп, автономия яулаған берҙән-бер халыҡ. Быға ул нисек ирешкән? Һис һүҙһеҙ, ат ярҙамында. Атһыҙ халыҡ ғәскәр ҙә төҙөй алмаған.

**▸ Үкенескә ҡаршы, совет осороноң барлыҡ милләттәрҙе бергә ҡушып, яңы совет халҡы барлыҡҡа килтереүгә йүнәлтелгән идеологияһы Башҡорт бал ҡорттарын да, берҙәй үк Башҡорт аттарын да урап үтмәгән икән. Шулай түгелме?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Статистика буйынса революцияға тиклем Башҡорт бал ҡорто 500 мең самаһы күсте тәшкил иткән, бөгөн 300 мең. Башҡорт бал ҡорто күсенең һаны 1964 йылға тиклем артып барған да, артабан улар кәмей башлаған. Беҙ бының сәбәбен 1997 йылда беҙ Бөрйән районына барғанда асыҡланыҡ, йәғни ҡасандыр 500 мең күстән 35 кенә оя таптыҡ. Ә инде 1964 йылда Бөрйәнгә Кавказ тоҡомло ҡорттарҙы ла урындағы ҡорттар менән ҡушып, яңы тоҡомдар сығарыу өсөн килтергән булғандар. Бына ошо тәжрибәләр һөҙөмтәһендә Башҡорт бал ҡортона, бигерәк тә Бөрйән тоҡомло бал ҡорттарына ер йөҙөнән юғалыу ҡурҡынысы янаған. Ғөмүмән алғанда, 1997 йылда Башҡортостандағы барлыҡ ҡорттарҙың 98 проценты метистарҙы, йәғни Кавказ ҡорто менән Башҡорт ҡортоноң ҡушылдығын тәшкил итә ине. Шуға күрә беҙ иҫән ҡалған 35 күсте алдыҡ та, үҙәккә яҡынырақ килтереп, Архангель, Нуриман, Ғафури, Күгәрсен, Ейәнсура районларында умартасылыҡ буйынса үҙебеҙҙең станцияларҙы төҙөнөк. Уларҙа Франциянан һәм Германиянан алынған инә сығарыу ҡоролмаларында Башҡорт бал ҡорттарын үрсетә башланыҡ.

1927 йылда Бөрйән районына профессор Кожевников килеп, Бөрйән бал ҡортон ҡарағанда, ниндәйҙер исем бирергә кәрәк булғас, "Кара төҫтәге Европа бал ҡорто" тип атап киткән. Йәйлап-йәйлап уны "Уртаса рус ҡорто" тип атай башланылар. Ә бына 1997 йылға тиклем станциялар төҙөгәнсе ул ҡорттар "Рус тоҡомло бал ҡорттарының Бөрйән популяцияһы" тип атала килде. Хатта уны Рус ҡортоноң тыумаһы тип тә атанылар. Мин тарихсыларға: "Әйҙә, үҙебеҙҙең Башҡорт бал ҡортон һаҡлап ҡалайыҡ. Меңәр йылдар буйына бер ниндәй ҙә Рус ҡорто беҙҙең ергә инмәгән, халҡыбыҙ кеүек үк Башҡорт бал ҡорто ла Уралыбыҙҙы берәүгә лә бирмәгән, суверенлы булған", - тип мөрәжәғәт иттем. Шунан һуң Рус ҡорто менән Башҡорт ҡортон алып, микроскоптар аша тикшерә башланыҡ. Уларҙың айырмалыҡтарын билдәләнек, айырмалыҡтарын билдәләүҙең методикаһын яҙҙыҡ. Таблица төҙөнөк һәм Рәсәй ерендә беренсе булып тоҡомдо билдәләүҙең положениеһын эшләнем, кандидатлыҡ диссертацияһы эшем дә шуға арналды. Документтар әҙер булғас, Мәскәүгә комиссияға бирҙем. Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы комиссияһы минең документты йыл ярым буйы тикшергәндән һуң, академиктарға бирҙе. Мин шул академиктар алдында Башҡорт бал ҡорто тоҡомон иҫбатлап сығарып, 2006 йылда Башҡорт бал ҡорто айырым тоҡом булып иҫбатланды. Рус бал ҡорто һәм Рәсәйҙәге тағы ла ете төрлө тоҡомдоң бер ниндәй ҙә документы, патенты юҡ, ә Башҡорт бал ҡортоноң үҙ паспорты бар. Беҙ уны башҡорт милләтенең үҙенең айырым бал ҡорто тип иҫбатланыҡ. Башҡорт бал ҡорто Рус ҡортоноң "тыумаһы" түгел, тигәндә лә иҫбат иттек бының менән. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, Башҡорт бал ҡортоноң хәҙер үҙ паспорты бар һәм ул паспорт менән бар донъя баҙарына сығырға була. Ә инде паспорты булмаған кешене самолетҡа ултыртмайҙар. Хәҙерге көндә беҙҙең илдән бер ниндәй тоҡомло ҡорттар ҙа продукцияһы менән сит илгә сыға алмай. Бының менән генә туҡталып ҡалманыҡ, Башҡорт бал ҡортон үҫтереүсе станцияларҙы тоҡомсолоҡ заводы кимәленә тиклем үҫтерҙек. Селекция эшендә "тоҡомсолоҡ заводы" дәрәжәһенә өлгәшеү - юғары баҫҡыс.

***Беҙ атлы, бал ҡортло, ҡымыҙлы, баллы халыҡ - бай халыҡбыҙ. Шәхси милкебеҙҙә эре-эре заводтар, миллиард һумдар булмаһа ла, ошо ҡиммәттәребеҙ менән үтә лә байбыҙ. Матди байлыҡҡа ҡарағанда ҡиммәттәр мәңгелек булыуы менән ҡиммәтлерәк. Кешелек йәшәйешендә ҡайһы халыҡтың аты булһа, шул халыҡ еңелмәҫ булған. Тик атлы халыҡ ҡына үҙен халыҡ итеп тойған. Беҙҙе боронғо дәүерҙәрҙән алып донъяға башҡорт итеп танытыусы - ул ат. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ әле башҡорт атына бер һәйкәл дә ҡуймағанбыҙ. Бер хорват егете миңә: "һеҙ ниндәй ғорурлана белмәгән халыҡ ул, беҙ хатта үҙебеҙҙең этебеҙҙе һауаға күтәреп маташабыҙ, ә һеҙ данлыҡлы атығыҙға һәйкәл дә ҡуя алмайһығыҙ", - тине. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: әгәр ҙә Салауат батырыбыҙҙың һәйкәле атһыҙ булһа, уның бәҫе кәмегән һымаҡ тойолор ине. Был нимәгә шулай тойола? Сөнки башҡорт менән ат икеһе бер бөтөн төшөнсә.***

**(Дауамы 11-се биттә).**

**✓ Мылтығын күтәреп тоҫҡауы булды, хайуанҡай йылп итеп боролоп ҡарамаһынмы! Йә, Хоҙай, күҙҙәре! Ялбарып текләгән кеүек үҙҙәре. Ир ҡаушаны. Ғилметдин быны тиҙ һиҙҙе. Тауышы бойороулы сыҡты: “Ат!”**

**Гөлдәр БҮЛӘКБАЕВА-БИРГӘНОВА**

# МАРАЛ КҮҘҘӘРЕ

## Хикәйә



-Ноотропил бармы? - тип һораны Хәнифтең алдында торған ҡатын, аптека тәҙрәһенә эйелә биреберәк, ҡулындағы ҡағыҙына ҡарап. Провизор ҡыҙ компьютерына текәлде. Бер аҙҙан:

-Бар, 400 һум, - тигән тауыш ишетелде.

-Бигерәк ҡиммәт икән, - тине ҡатын ауыр көрһөнөп. - Ә осһоҙораҡ шундай уҡ дарыу юҡмы?

Былай ҙа ҡабаланган Хәнифтең түҙемлеге шартлап һынды. Киҫкен тауыш менән:

- Пирацетам алығыҙ, ханым! Кү-үпкә осһоҙораҡ! - тине.

Тертләп киткән ҡатын, өтәләнеп, ике ҡап пирацетам һатып алды. Уф, ниһайәт, сираты етте ирҙең. Тауышы бойороҡ биргәндәй яңғыраны:

- Йод, зелёнка, бинт!

Иҫәпләшеп, тышҡа сығыуына, тупһала теге ҡатын менән йөҙгә-йөҙ осрашты. Осрашты ла ҡара төн төҫлө түңәрәк күлдәй күҙҙәре упкынына осто... Ҡайҙандыр алыҫтан бәрхәттәй тауыш аҡланғандай ишетелде:

- Рәхмәт инде һеҙгә. Дарыуҙар бигерәк ҡиммәт бит хәҙер...

"Дарыу" һүҙен ишетеп, ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайтты Хәниф.

- Ә-ә-ә. Ә һеҙгә ҡайҙа? Әйҙәгеҙ, машинала илтеп ҡуям.

- Китсәле, эшегеҙҙән айырылып ни, - тип ҡаршылашып маташҡан ҡатынды, ай-вайына ҡуймай, машинаһына индереп ултыртты ул.

- Өмөт урамына минә, - "такси" табылыуына ҡыуанғандай итте ҡатын.

Ярты сәғәт ваҡыт осоп тигәндәй үтте Хәниф өсөн. Шул арала ҡатын менән ныҡлап танышырға ла өлгөрҙө. Наилә исемле, автотранспорт ойошмаһында бухгалтер булып эшләй, яңғыҙы ғына ҡыҙ үҫтерә.

Барып еткәс, уйынлы-ысынлы хәбәрен теҙеп, албырғатып, йәһәт кенә телефон номерын белешеп яҙып алды, ә ҡатынға үҙенең визиткаһын тотторҙо. Осраҡлы танышын бер күреүҙән оҡшатһа ла, артабан ҡылын сиртергә ваҡыты юҡ ине. Таулы төпкөл районда һунарсы танышы көтә уны. Ҡулынан килгән ярҙамын күрһәткәйне бер заман, шуның хаҡын ҡайтара хәҙер. Әллә ҡасандан, һунарға алып сығам, тип вәғәҙәләй ине. Бына яйы ла тура килде лә бит. Их, ниңә бер булмаһа, булмай, булһа - бөтәһе бер юлы икән, ә?!

Эстән генә һүгенеп, Хәниф газға баҫты. Ҡаланы сығып, юл бер аҙ һилләнгәс, уйға сумды. 50 йәшлек ир уртаһы ул. Исем-дәрәжәһе, абруйы, елле машинаһы, ҡыҙыл кирбес өйҙә 125 квадрат метрлы өс бүлмәле фатиры бар. Тик унда шыҡһыҙ, күңелһеҙ. Кәләше менән 15 йыл элек уҡ айырылыштылар. Ике балаһын сабый саҡтарынан уҡ күргәне юҡ - үҫкәндәрҙер инде. Кәкүк әсәйҙәр була, ә быны ул - кәкүк атай.

Тәүҙә әллә ни иғтибар бирмәне быға. Йәш саҡта уйланырға ваҡыт буламы ни? Йоҡоң туйһа, шөп әле! Иртән - эшкә, кис кафе-клубҡа кәйеф-сафа ҡорорға йүгерәһең. Таң ата ла кис була, таң ата ла кис була... Йә, Хоҙай, шул рәүешле нисәмә йыл үтеп тә киткән, әй...

Еңел-елпе тормоштан да туйҙы. Иртәгәһе көнгә яҡты өмөт менән ҡарағыһы килде. Үс иткәндәй, ишек алдарында коляска эткән, бәпәй күтәреп-етәкләгән әсәйҙәр генә түгел, атайҙар ҙа күбәйҙе. Ғаилә культы, имеш. Хөкүмәте лә быны хуплап ҡына тора. Һәр төрлө дәртләндерә, ташламалар яһай. Хәниф кенә һаман эштән сыҡҡас та: "Мин ҡайтам, магазиндан нимә алайым?" - тип бер кемгә лә шылтыратмай. Фатир ишеге төбөндә ҡыңғырауға ла түҙемһеҙләнеп баҫмай...

Танышманы түгел, танышты. Ҡыҙҙар быуа быуырлыҡ. Тик барыһы ла уның аҡсаһын, иномаркаһын, фатирын яратты, ә үҙен түгел. Ундай саҡта эҫенмәҫ борон тип араларҙы өҙҙө, бер аҙнанан йөҙөн, ике аҙнанан исемен онотто.

"Һе, ҡыҙыҡ, ә был сөм-ҡара күҙле ҡатын ниндәй ҡамырҙан икән? Үҙе иң осһоҙ дарыуҙы таптыра, үҙе илтеп ҡуйған өсөн аҡса һоноп маташа. Кем әйтмешләй, ярлыбыҙ беҙ, әммә ғорурбыҙ". Их, яҡынданыраҡ танышырға ине лә, ике көн генә ялы бар. Башын елләтеп ҡайтырға иҫәбе. Арыуы сигенә еткән. Былай ҙа мөдир отпускыға ебәрмәҫкә итә, йәнәһе лә, тороп тор, кеше етмәй. Шулай ҙа: "Теләһә нимә эшләгеҙ, инде сентябрь бит инде, бер аҙнанан барыбер китәм", - тип ғариза яҙып сыҡты бөгөн генә.

* * *

Таң менән бишәү сыҡтылар һунарға. Кәрәгенсә кейенеп, ҡоралланып. Ғилметдин йышылып бөткән был эштә. Һәр ҡунағының күңелен ошолай күрә - белә ул ҡала ирҙәренә нимә оҡшағанын. Әле ярҙамға тип ауылдың өс әтрәгәләмен дә алды.

Тау теҙмәләрен бер күтәрелә, бер төшә торғас, килеп туҡтанылар, ниһайәт. Машинанан төшкәс, Ғилметдин теге өс ирҙе төньяҡ һырт буйлап уңға ебәрҙе. "Ҡарағыҙ уны, һаҡ ҡыланығыҙ, тотҡан урындан һындырып ҡуймағыҙ. Унан эсерһегеҙ эсмәй сәмәйҙе", - тип киҫәтеп-янап алырға ла онотманы. Унан ҡулындағы ике мылтыҡтың береһен Хәнифкә һоноп, үҙен икенсе яҡҡа әйҙәне: "Киттек. Хәҙер теге биғәләштәр ҡаршыға ҡыуып сығарасаҡ беҙҙең ҡорбанды". Үҙе ҡәнәғәт кеткелдәне. Ҡунаҡ һәр нәмәне белеп эш итеүсе танышына көнләшеп ҡарап алды ла өндәшмәй генә артынан эйәрҙе. Оҫта барҙа теленде тый, тиҙәр бит.

Шырлыҡ эсенән оҙаҡ барҙылар. Хәлдән тайҙы Хәниф. Һаҡ атларға ла, ҡулындағы ауыр мылтыҡты әҙер тоторға ла кәрәк. Бер мәл үкергән хайуан тауышы яңғыраны. Хәниф тертләп китте лә, Ғилметдингә ҡараны. "Тс-с-с. Маралдарҙың ҡарығыу осоро. Ошо таш өҫтөндә, ҡыуаҡтар араһында көтәйек", - тине юлдашы.

Минуттар һуҙылды. Көтөүе еңел түгел икән. Аптырап, аяҡ аҫтындағы һарғая башлаған үләнде итеге менән иҙгесләй башлаған Хәнифте иптәшенең һаҡ ҡына ҡабырғаһына төртөүе һиҫкәндерҙе. Һүҙһеҙ генә ымлауы "сәпкә ал" тигәнде аңлатты, буғай.

Ҡул һуҙымы ғына алдараҡ ағас араһынан асыҡлыҡҡа килеп сыҡҡан һомғол буйлы, неҫкә тояҡлы мөгөҙлө йән эйәһен дә күрмәй торасы. "Болан. Марал тиҙәр уны был яҡтарҙа. Нисек шулай яҡын ебәрҙе һуң уларҙы? Әжәле көткәнен самаламаймы икән?" Мылтығын күтәреп тоҫҡауы булды, хайуанҡай йылп итеп боролоп ҡарамаһынмы! Йә, Хоҙай, күҙҙәре! Ялбарып текләгән кеүек үҙҙәре. Ир ҡаушаны. Ғилметдин быны тиҙ һиҙҙе. Тауышы бойороулы сыҡты:

- Ат!

Ҡолаҡ тондорғос тауыш яңғырауға, марал гөрс итеп ергә ауҙы. Аҡландың теге яғынан өс әшнә, был осонан Ғилметдин уға табан йүгерҙе. Хәниф кенә башы әйләнеп, ҡоҫҡоһо килеп, ергә сүгәләне...

Кисен ауылда туйҙай байрам ҡупты. Уңған хужабикәләр мунса яҡты, марал ите бешерҙе. Ишеге асыҡ торған аласыҡ эсенән сыҡҡан тәмле еҫтәр иртәнән бирле танауҙы ҡытыҡланы. Ҡапҡа эсендә түбәләк аҫтында ҡоролған табынға бер-бер артлы буҙа-ҡымыҙы ла, балыҫәксәге лә, талҡан-эремсеге лә килеп ҡунаҡланы. "Ҡалай был яҡтарҙа аш-һыуҙы төрләндереп әҙерләйҙәр, хәҙер магазинда әҙер ризыҡ та тулып ята бит", - тип уйланы Хәниф. Мунсала ҡайын миндек менән сабынып, бөтә арыу-һыҙлауҙары юҡҡа сыҡҡан ҡала ҡунағы әле бер ашамлыҡҡа, әле икенсеһенә һонолдо, тик иткә генә ҡағылманы. Хатта үлтереп ҡыҫтаусы хужа ла берәй киҫәк тәмләргә мәжбүр итә алманы. "Ашҡаҙан аҫты бизенә килешмәй", - тигәс кенә бәйләнеүҙән туктанылар.

Ысынында иһә, сәбәп башҡа ине. Ашау ҡайҙа, ҡарай алманы Хәниф болан итенә. Эш хатта маралға һунар тыйылыуҙа ла түгел. Теге әжәлгә дусар ителгән бахыр хайуанҡайҙың ҡарашы күҙ алдынан китмәне. Ә Хәнифтең ҡулында ине бит уның яҙмышы. Бер һыҙғырып ебәрһә әгәр шунда...

* * *

Наилә ҡабаланып ҡайтып инде. Хатта юлдашы биргән визиткаға күҙ һалырға ла яйын тапманы. Уйһыҙ, иркенләп китә алмай ул ҡайһы берәүҙәр төҫлө. Ҡыҙын яңғыҙын ҡалдырһа, йөрәген гел усына тотоп йөрөй. 25 йәшкә етһә лә, кеше көнлө шул ғәзизе. Ҡаты ауырый. Ире түҙмәне, китте. Икәү генә йәшәгәс, Наилә эштә саҡта бер үҙе ҡала. Ярай әле, телефондан сәғәт һайын шылтыратып тора. Эшләмәй сара юҡ - бөтә аҡсаһы дарыуҙарға китә.

Ҡатын бүлмәгә үтте. Ҡыҙы устары менән башын ҡыҫып тотоп, диванда ята ине. "Ауыртамы?" - тине әсә йәлләп ҡарап. Яуап урынына "А-а-аы-ы-ы", тигән аңлайышһыҙ өндәр ишетелде. Яҡыныраҡ килеүгә, ҡыҙының һыңар күҙенең тартышыуын, йөҙөнөң салшайып китеүен, тәнен көҙән йыйырыуын самаланы. Ул телефонға ташланды: "Алло, скораямы? Ҡыҙымдың хәле насар! Баш өйәнәге ҡуҙғалды! 25 йәш... Өмөт урамы, 9-сы йорт, 11-се фатир..."

* * *

Палатала өс карауат. Берәүгә операциянан һуң торорға ярамай. Икәү операция көтә. Уң рәттән тәҙрә янында аварияға осраған ҡыҙ ята. Башы бинтка сорналған. Янындағы әсәһенә ураған һайын бер һорауҙы бирә: "Ҡасан сәсем үҫә инде?"

Уларҙың карауатына ҡаршы ғына ятҡан йәш ҡатындың мейе тамырҙары эшмәкәрлеге боҙолған. Кисә дауалаусы табибы килеп, күрһәтмәләр биреп китте. Әле шәфҡәт туташы инеп, укол һалып сыҡты. Тимәк, бына-бына операцияға алып китәсәктәр. Эргәһендә оло ғына йәштәге әсәһе йыуатып-тынысландырып ултыра.

Ҡапыл тәҙрә төбөндәге ҡыҙҙың әсәһе уға ҡарап:

- Һеҙҙән күпме һоранылар? - тип ҡуйҙы.

Әбей һиҫкәнеп китте:

- Нимәне күпме?

- Ыста. Нисек нимәне? Аҡсаны, тим. Аңламағанға һалышмағыҙ инде, бында бөтәһе лә операция өсөн түләй. Ғүмер һәр кемгә ҡәҙерле.

Оло кеше ни тиергә лә белмәй шаңҡып ҡалды. Унан ҡыуанып китеп:

- Бер тин дә һораманыларсы. Врач врачҡа тура килмәй инде ул. Һеҙҙеке һораһа һорағандыр, - тип яуапланы.

Теге ҡатын да һүҙен биргеһе килмәне:

- Тимәк, операция уңышлы үтер тигән ышаныс юҡ. Былай бөтәһенән дә йыпырып алалар аҡсаны. Аҙаҡ бүлешәләр, ахыры.

Ҡарт әсә сеңләп илап ебәрҙе. Тартай теленән таба, тигәндәй, тәҙрә төбөндәге ҡатын эште боҙғанын аңлағанда һуң ине инде. Бүлмә эсе ҡара ҡайғыға батты.

Наилә нимә эшләргә лә белмәй үрһәләнде. Ауыртыуҙы баҫҡан уколдан һуң йоҡлап киткән ҡыҙының одеялын рәтләштергән булды. Тумбочка өҫтөндә торған шешәләге һыуҙы эсеп ҡуйҙы. Шунан әбейҙе йыуатырға теләп:

- Юҡсы, бөтәһенән дә алмайҙарсы. Бына беҙҙән бер ҙә һораманылар, - тине.

- Ысынмы? - Бер мәлдә йөҙө ҡартайып киткән ҡарсыҡ уға өмөт менән текләне.

- Ысын.

Әбейҙең күҙҙәре һағышлы булһа ла, ирендәрен йылмайыу ҡунды. Өнһөҙ ятҡан ҡыҙының арҡаһынан һөйөп алып, ҡолағына ниҙер шыбырланы.

Наилә әйтте лә һүҙҙәрен, эстән таш һындай ҡатты. Унан да аҡса талап итмәнеләр бит. Кинәйәләп тә белгертмәнеләр хатта. Һөйләгәне раҫ булһа теге ҡатындың...

Илап ебәрмәҫ өсөн, ирендәрен ҡымтып, коридорға сыҡты. Тәҙрә аша тышҡа баҡты. Көнө лә эс бошороп боҙолоп тора. Ярай, һоранылар ҙа, ти. Ҡайҙан алып бирер ул кәрәкле сумманы?

Иртәгеһенә иртүк Наиләнең ике туған һеңлеһе килде. Ҡатын иркен тын алып ҡуйҙы. Рәхмәт яуғыры, операцияға тиклем кәрәк-яраҡ артынан тышҡа сығып әйләнер. Аҙаҡ карауат янынан да китә алмаҫ.

Эштәрен тамамлап, кире әйләнеп килгәндә, һеңлеһе табиптарҙың инеп сығыуы тураһында хәбәр итте. Ярай, дауалаусы табип менән таныш инде, йәл, бына анестезиологы менән күрешеп-һөйләшә алманы Наилә. Бында һәр ваҡ-төйәк мөһим булырға мөмкин.

*ДИАЛОГ*

# БАЛ ҠОРТОБОҘ, БАЛЫБЫҘ, АТЫБЫҘ, ҠЫМЫҘЫБЫҘ...

## Уларҙы һаҡлау үҙебеҙҙе лә һаҡлау буласаҡ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Башҡорт аты шулай бәләкәй кәүҙәле генә, ит һәм ҡымыҙ биреүсе ат булған, тигән фекер дөрөҫ түгел. Һәр бер башҡорттоң, әйтәйек, юрғаһы булған. Юрғалар хужалыҡта иң күп ҡулланылған. Юрға - талмаҫ ат, бер ынтылғанда 30-50 саҡрымға китә алған. Юрғалар менән оҙон юлға, башлыса ҡунаҡҡа йөрөр булғандар. Һәр бер яугирҙең юрғаһы яндауында саптар яу аты ла булған. Яу аты артынан артмаҡланған йөк аты ла эйәргән. Тимәк, аттар төрлө тәғәйенләнешле булған. Беҙ хәҙерге көндә ошо аттарҙың барыһын да тик бер төрлө бәләкәй кәүҙәле башҡорт атына ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Ә ҡайҙа һуң бында аҡбуҙаттар, толпарҙар, арғымаҡтар? Улар әкиәт персонаждары ғына түгел бит. Башҡорттарҙың иң боронғо бабаһы Урал батыр булһа, башҡорт аттарының иң боронғо бабаһы - Аҡбуҙат. Миненсә, был аттарҙы беҙ юғалтҡанбыҙ. Йылҡысылыҡ буйынса тоҡомсолоҡ эшен онотҡанбыҙ. Ҡаҙаҡтар ҙа үҙҙәренең менге аты - казанатты юғалтҡан. Онотоу ғына түгел, юртаҡтарҙан, юрғаларҙан айыра алмай бер булабыҙ. Аҡбуҙаттарыбыҙҙың, толпарҙарыбыҙҙың, арғымаҡтарыбыҙҙың юҡҡа сығыуының икенсе бер сәбәбе - фәнни-техник прогресс һөҙөмтәһендә аттарға ихтыяж кәмеүендә лә. Ауылдарға барһаң, сабан, үшән аттарҙы ла күрергә тура килә. Ундай аттарҙы һәүерек тип тә атайҙар. Бындай аттарҙың барлыҡҡа килеүе ана шул тоҡомсолоҡ эшенең булмауынан килә. Башҡорт тоҡомло бейәләрҙе осраҡлы айғырҙар менән торотоу һөҙөмтәһе был.

Беҙ атты тәрбиәләү мәктәбен юғалтҡанбыҙ. Халҡыбыҙҙа атты тәрбиәләү, бәйгегә әҙерләүҙе "атты яратыу" тип тә атайҙар. Шулай уҡ атты һуғышҡа, походтарға әҙерләү мәктәбе лә булған. Ат хужаһының бойороғон үтәп, ергә ятҡан, һыҙғырыуына, йүгереп килгән, яраланған хужаһын яу яланынан алып сыҡҡан.

Ауылдарҙа боронғонан ҡалған юрғалар әле лә осрай. Булғандарын ҡаҙаҡтар үҙҙәренә ташый. Беҙ әле һаман да быға илтифат бирмәйбеҙ. Ике көн элек кенә улар 9 баш юрғабыҙҙы һатып алды. Беҙ юғалтабыҙ, ә ҡаҙаҡтар таба. Беҙгә кисекмәҫтән юрғаларыбыҙҙың ситкә сығыуына кәртә ҡуйырға кәрәк. 50-се йылдарҙа Уралтауҙа һуңғы тапҡыр тарпандарҙы күргәндәр. Башҡорт аттары тарпандарға талымһыҙ булыуы, арҡаларында юлаҡбилдек булыуы менән оҡшаған. Беҙ ана шул тарпандарҙы юғалтҡан кеүек, юрғаларыбыҙҙы ла бөтөнләй юғалтыуыбыҙ бар.

**▸ Бал ҡорттары беҙгә ҡарағанда бәхетлерәк, сөнки уларҙың паспортында "Башҡорт" тигән һүҙ бар.**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Улай ғына ла түгел, бал ҡорто милләтебеҙҙе бар донъяға данлыҡлы итә, кешеләр эшләй алмаҫлыҡ ғәмәлдәрҙе башҡара, милләттең сәйәсәтенә хеҙмәт итә. Беҙгә киләсәктә Башҡорт аты, Башҡорт ҡымыҙы брендтарын да ошо кимәлгә тиклем күтәреү фарыз.

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Аттың паспорты кешенең паспортына ҡарағанда ла камилыраҡ, миненсә. Унда ҡолонға атаһының һәм әсәһенең баш хәрефтәре менән исем бирелә һәм иң мөһиме: ҡолон атаһының тоҡомона индерелә, әйткәндәй, әсәһе ниндәй генә тоҡомдан булыуына ҡарамаҫтан. Юҡҡа ғына кеше исеме лә ат менән тинләнмәгән бит. "Атың кем?" тигән һорау "Исем-шәрифең кем?" тигәнде аңлата. Был һорауҙың артында "Менеп йөрөгән атыңа ҡарап, мин һинең дә кем икәнлегеңде әйтә алам" тигән мәғәнә лә ята.

**▸ Бал ҡорто иләүендә лә, йылҡы өйөрөндә лә тоҡомдоң сафлығы яҙылмаған ҡанун һанала. Был йәһәттән уларҙың йәшәү рәүеше кешеләргә үрнәк булырлыҡ. Шулай түгелме?**

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Өйөр башы - айғыр. Ҡаҙаҡтар элек-электән башҡорттарға барымта менән килгәндә һәр саҡ өйөр башын ҡулға төшөрөргә тырышҡан. Айғыр өйөрҙәге бейәләрҙе һәм ҡолон-тайҙарҙы күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған. Башҡорт тоҡомло айғыр өйөрҙәгеләр ашап туймайынса тороп, бер ваҡытта ла моронон үләнгә төртмәгән. Беҙҙең өйөргә көтөүсе лә кәрәкмәй, айғыр өйөрҙө эт-ҡоштан, бүреләрҙән һаҡлап, өйөрөп, үҙе көтә. Әгәр ҙә өйөрҙән бер бейә айырылып китеп, икенсе айғырға ятһа, өйөр айғыры ул бейәне ҡабат өйөргә ҡабул итмәй. Ҡыҫҡаһы, йылҡы өйөрөндә, кешеләрҙән айырмалы рәүештә, тыумаларға урын юҡ. "Типтәр" һүҙенең мәғәнәһен төрлөсә аңлаталар. Миненсә, был һүҙҙең тамыры тик бер генә мәғәнәлә, ситкә тибелеүҙә ята һымаҡ. Өйөрҙән айғыр тарафынан ситкә тибелгән бейәне лә "типке" тип атайҙар. Типке, тимәк, аҫабалығын юғалтҡан.

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Бал ҡорто күсендә, кереһенсә, инә ҡорт хакимлыҡ итә. Был турала мин гәзит биттәрендә күп яҙҙым. Шуны ғына әйткем килә: инә ҡорт тыуасаҡ балаларының аталары менән ҡан яҡынлығына юл ҡуймаҫ өсөн үҙ күсенән 10-15 саҡрымға ситкә китеп, бөтөнләй башҡа күстең аталығынан аталана. Был осраҡта ла уны сит күстең иң көслө, иң талымһыҙ ата ҡорто ғына ҡыуып етә.

Әле Президентыбыҙ беҙҙең күҙгә күренеп торған ҡиммәттәребеҙҙең брендын булдырыу хаҡында әйтте. Был эш күптән эшләнергә тейеш ине. Ниңә әле ошолар һымаҡ беҙҙең ҡурайҙың, оҙон көйөбөҙҙөң брендтары хаҡында ла уйланмаҫҡа? Башҡорт тирмәһенә, башҡорт ҡоротона, башҡорт орнаменттарына ла шулай уҡ патенттар юлларға ваҡыт. Быны эшләмәһәк, килер ваҡыт: беҙ үҙебеҙҙең ҡиммәттәрҙе башҡаларҙан һатып алып йөрөргә мәжбүр буласаҡбыҙ. Беҙ Салауат Юлаевтың һынын бал һауыттарына ҡуйғайныҡ, уның нәҫелдәштәре беҙҙе судҡа бирә башланы. Штрафтар түләгәндән һуң беҙ уның һынын бал һауытының тышына ҡуйыуҙан баш тарттыҡ. Мин был хәлгә аптырайым. Әгәр ҙә минең атайымды йә ҡартатайымды кемдер береү символ итеп ҡулланһа, мин быныһ өсөн ғорурланып йөрөр инем.

**Х. КИЛДЕҒОШОВ:** Беҙ әле атыбыҙҙы ла, бал ҡортобоҙҙо ла юғалтмағанбыҙ. Уларҙы һаҡлау, үрсетеү һәм үҫтереү бренд ҡына түгел, милләттең йәшәү рәүешен тәьмин итеү, заман талабы.

**Шулай итеп...**

**Президент тәҡдим индерҙе, ҡалғаны беҙҙең хәстәр, йәмәғәт! Әңгәмәлә ҡатнашыусы ике ир-уҙаман да ошо хакта белдерҙе. Бал ҡортобоҙҙо, балыбыҙҙы, йылҡы малыбыҙҙы һәм ҡымыҙыбыҙҙы үҙебеҙ һаҡламаһаҡ, якламаһаҡ, уларҙы кем һаҡлар һәм яклар? Был ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау һәм яклау үҙебеҙҙе лә яклау һәм һаҡлау буласаҡ. Шулай түгелме?**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

* * *

Елләнеп йөрөп ҡайтты Хәниф. Ғилметдин дуҫының "мәҙәни" программаһынан күңеле күтәрелеп, ғарҡ булғансы ҡунаҡ булды, хәҙер отпускыға тиклем берәй аҙна түҙһә...

Иртән эшкә барғанда юл буйындағы банкоматтан 20 мең аҡса алды. Сменанан һуң тура турагентлыҡҡа инеп, дингеҙгә юллама хәстәрләр.

Дауаханаға килеп, ординатура бүлмәһенә ингәс, бөгөнгә тигән мөһим ҡағыҙҙарҙы аҡтарҙы. "Тә-ә-әк, операция. Аневризма. Гөлфиә Әхмәтова... Әһә, кисә инеп күреп сыҡҡайны бит әле".

Уйҙарын шәфҡәт туташы Асия бүлде. Ҡыҙ ишекте ҡыҫып асып:

- Хәниф Муллахмәтович, әйҙәгеҙ, кҫтәнәс менән сәй эсергә, - тине шыпырт ҡына.

- Була ул, Асияҡай, - тип йылмайырға ла өлгөрмәне, кеҫә телефонына шылтыраттылар. Тиҙ генә беренсе ҡаттағы операционныйға килеп етеүен үтенәләр, хәйерһеҙҙәр.

Хәниф - анестезиолог-реаниматолог. Эш бурыстарының береһе - операция өҫтәлендә ятҡан ауырыуға наркоз биреү. Ул әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, тап-таман булырға тейеш. Яңылышырға хаҡы юҡ уның. Ана, үткән аҙнала хирургияла яп-ябай операциянан һуң йәш егет наркоздан уянмаған да ҡуйған. Доза артыҡ булған.

Операция блогында һалҡынса. Хәниф барып инеүгә, ауырыуҙы әҙерләгәйнеләр инде. Шәфҡәт туташтары ҡоромалдарҙы ла теҙеп һалып, өҫтөн ябып ҡуйғандар. Ир өҫтәлгә яҡынайып, унда ятҡан ҡыҙға ҡарау менән тертләп китте. Ниндәй таныш йөҙ был? Берәй танышымы? Ҙур асылған күҙҙәр һағайып, мөлдөрәп ҡарай. Бында килеп эләккән һәр кем шундай тойғолар кисерә. Шулай ҙа... ниңә уның күңеле тыныс түгел? Күҙгә күренмәгән ниндәй көс төпкөлдәге нескә ҡылдарға ҡағылып үтте һуң? Туҡта-туҡта, ҡайҙа тап иткәйне әле был ҡарашты? Һунарҙа! Ҡапыл унын күҙ алдына алтынһыу-ҡыҙғылт төҫтәргә күмелеп йәйрәп ятҡан хозур ҡыр, иртәнге ҡояш нурҙарында аҡлан уртаһында иҙрәп баҫып торған марал килеп баҫты. Ул да тап шундай итеп баҡҡайны бит уға! Ялбарып, ярҙам өмөт итеп...

Хәниф ҡара болоттарҙай ябырылған уйҙарын ҡыуырға тырышты. Ваҡыты бөгөн түгел. Әле уның етди бурысы бар.

Ул эшен тамамлап сыҡты ла, оҙон коридор буйлап кире нейрохирургия бүлексәһенә йүнәлде. Код менән бикләнә торған ауыр тимер ишектәге ҡара төймәгә баҫыуы булды, уныһы еңел генә асылып китте.

Ғәҙәттә, дауахананың был мөйөшөндә кеше мыжғып тормай, ҡараңғы, һил була. Бер генә ишек, уныһында ла "Ситтәргә инеү тыйыла" тип яҙылған. Шуға ла ҡаршы стенаға һөйәлгән кеше һөлдәһен сырамытып тертләп китте. "Кемеһелер операция өҫтәлендә, ахыры", тип уйлап та өлгөрмәне, ҙур асылып өмөт менән баҡҡан сөм-ҡара күҙҙәрҙе шәйләп, баҫҡан урынында ҡатып ҡалды. "Абау, бигерәк һағышлылар. Әйтерһең, донъялағы бөтә ҡайғы һыйған үҙҙәренә", тип уйлап өлгөрөүгә, ҡатында бая операция өҫтәлендә ятҡан сибек ҡыҙҙы сырамытты. Әллә?.. Ah!..

- Наиләү...

- Хәниф? Һин бында нимә эшләйһең?

- М-мин... эшләйем. Ә һин...

- Ҡыҙыма операция яһағандарын көтәм. Баш мейеһе тамырында аневризма.

- Гөлфиә Әхмәтовамы?..

- Эйе, шул. Нисек икән хәле?

- Яҡшыға юрайыҡ. Операциянан һуң бер аҙ реанимацияла ятыр ятыуын. Хәҙер хирург сығып бөтәһен дә әйтер.

- Хәниф, һеҙ бында эшләгәс, һорайым әле... Хирургка, анестизиолоҡа түләргә кәрәк, тиҙәр палаталағылар...

- Юҡ... Белмәйем... Мин - өҫкә, 9-сы ҡатҡа...

Хәниф тағы әллә нимәләр өҫтәргә теләгәйне лә, уйҙары сыуалып китте. Унан аңҡы-тиңке булып, лифт яғына ыңғайланы. Бүлексәгә күтәрелгәнсе манма тиргә батты. Ошо 10 секунд эсендә мейеһенә мең төрлө уй ояланы. Кәрәкле ҡатта лифт ишеге асылғанда мөһим бер ҡарар ҡабул итергә өлгөргәйне шулай ҙа.

Хәниф ишекте шар асып, ординатура бүлмәһенә барып инде. Шкафтан кейемен, сумкаһын сығарып, диванға атты. Барсетҡаһын аҡтарып, юлламаға тигән аҡсаһын тәҙҙырып һанап алды. Машина документтары араһынан 500 һумлыҡты ла табып өҫтәне. Шунан аптырап ҡарап ултырған хеҙмәттәшенә бороллдо:

- Аксаң бармы? Бир! Вис кенә!

Тауышы үтенесле лә түгел, ике уйларға урын ҡалдырмағандай яңғыраны. Йәш табип өтәләнә-өтәләнә кеҫәләрен ҡапшарға тотондо. Булған мөнлектәрен йыйып, Хәнифкә һондо, тик һорау бирергә ҡыйманы. Хәниф өҫтәл тартмаһын асып, конверт алды. Аҡсаларҙы тыңҡыслап шунда тултырҙы ла ишеккә йүнәлде.

Коридорҙа елбәҙәк Асияның нескә тауышы ҡыуып етте:

- Хәниф Муллахмәтович! Сәй эсмәйһегеҙме ни?

- Юҡ, Асия, ҡабаланам! Үҙегеҙ эсегеҙ! - Һуңғы һүҙҙәр ул инеп киткән 12-се палата төпкөлөнән яңғыраны.

Палатала ауырыуҙар ҙа, яндарында ултырыусылар ҙа урындарында ине. Хәниф тәҙрә төбөнә үтте. Ҡулындағы конвертты аварияға осраған ҡыҙҙың әсәһенә һуҙҙы. Ҡатын ғәжәпләнде, әммә конвертҡа үрелмәне.

- Алығыҙ, алығыҙ. Ҡыҙығыҙҙың тиҙерәк һауығыуын теләйем, - ир Гөлфиәнең етемһерәп ҡалған карауаты яғына күҙ һалып-һалып алды.

Коридорға сыҡҡас, Хәниф тура мөдир бүлмәһенә йүнәлде. Йән-фарман килеп ингән хеҙмәткәренә аптырап ҡараны бүлексә етәксеһе. Танау осондағы күҙлеген төҙәтҡеләп, ауыҙ асырға өлгөрмәне, көтөлмәгән һорау яңғыраны:

- Әхәт Шәүкәтович, минең ғаризам ҡайҙа икән? Бирегеҙ әле.

Мөдир өҫтә генә ятҡан ҡағыҙҙы ҡулына тотоуы булды, Хәниф үрелеп, уны йолҡоп тигәндәй алып, йыртҡылап, мөйөштәге кәрзингә ырғытты. Ҡабаланып сығып китешләй:

- Әхәт Шәүкәтович, әле генә отпускыға китмәҫкә булдым әле мин! - тип ҡысҡырҙы.

Коридорҙа бер мәлгә туҡтап ҡалды ир. Өҫтөнән ауыр йөк төшкәндәй, тәрән итеп тын алды. Унан ҡырт боролоп, беренсе ҡатҡа - реанимация блогына атланы. Күҙ алдынан үтенгән, ялбарған марал ҡараштары китмәне. Наиләнең ҡыҙында ла шул уҡ ҡараш. Мәрхәмәт һораған ҡараштар, күҙҙәр һәр йән эйәһендә лә бер үк төрлө була икән дә. Хәниф маралды ҡотҡара алманы, ә бына Гөлфиәне мотлаҡ ҡотҡарырға тейеш. Хәҙер инде йәшәүенең мәғәнәһе шуға бәйле...

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҢҒЫҘЛЫҠ...

## заман сиренә әүерелә

■ Канаданың Монреаль университеты тикшеренеүселәре әйтеүенсә, эсәр һыу составындағы марганец балаларҙың интеллект үҫеше кимәленә насар йоғонто яһай. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 6-13 йәшлек 362 бала ҡатнаша. Уларҙың һәр береһе йәшәгән өйҙә белгестәр крандағы һыуҙағы марганец, шулай уҡ тимер, баҡыр, цинк, мышьяк, магний һәм кальций концентрацияһын тикшереп, төрлө тестар ярҙамында был металдарҙың бала һаулығына йоғонтоһон асыҡлаған. Һыуҙа марганец күләме ҙур булған йорттарҙа йәшәүсе балалар араһында интеллект коэффициенты дефициты күҙәтелгән. Тикшеренеүселәр фекеренсә, был металл интеллект үҫешенә кире йоғонто яһай. Марганец тәбиғи рәүештә тупраҡта, һауала һәм һыуҙа осрай, ә аҙыҡта булған марганец интеллект коэффициентына йоғонто яһамай.

■ Ҡулды йылы һауа ағымында киптергән саҡта тиреләә микробтар тупланыуы тағы ла арта, тип белдерә Брэдфорд университеты тикшеренеүселәре. Тикшереү барышында белгестәр ҡулдарҙы йыуғандан һуң ҡоротмау ҙа микробтарҙың артыуына килтереүен асыҡлаған. Шуға ла эксперттар дөйөм ҡулланылыштағы урындарҙа ҡул йыуырға тура килһә, уларҙы бер тапҡыр ҡулланыла торған таҫтамал менән һөртөргә тәҡдим итә.

■ Британия социологтары, йылдан-йыл яңғыҙҙар һаны арта, тип борсола. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, яңғыҙлыҡ проблемаһы менән йәштәр һәм оло йәштәге кешеләр яфалана икән. Белгестәр әйтеүенсә, йәш саҡта кеше аҡса эшләү һәм башҡа матди байлыҡ туплауҙы ғаилә ҡороуҙан өҫтөн ҡуя һәм шуға ла үҙен яңғыҙ тоя. Шулай уҡ урта йәштәге парҙар араһында айырылышыуҙар ҙа арта бара, ти ғалимдар. Сағыштырмаса статистика күрһәтеүенсә, 40 йыл элек Британияла яңғыҙаҡтар һаны 125 мең тирәһе булһа, хәҙер был һан 400 меңгә еткән. Ошондай уҡ хәл үҫешкән башҡа илдәрҙә лә күҙәтелә.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урын биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■Британия ғалимдары электрон почта стресс факторы булып тора, тип хәбәр итә. Социологик тикшеренеүҙәр ваҡытында яуап биреүселәрҙең 57 проценты электрон почта йәшниген асҡан һайын стресс кисереүҙәрен белдергән. Бынан тыш, респонденттарҙың 40 проценты килгән хаттарға ваҡытында яуап бирмәһә, ҙур борсолоу кисерә, ә 30 процентына хаттар шул тиклем күп килә һәм улар бөтөнләй яуап биреп өлгөрмәй. Уртаса статистик британлының ике почта йәшниге бар һәм ул уны көнөнә ике-өс тапҡыр асып ҡарарға мәжбүр, ти ғалимдар.

ҺЫЙЛЫ ӨЙГӘ ҺЫЙЫНАЛАР



# ӘСӘЙЕМДӘН ДӘ, ҠӘЙНӘМДӘН ДӘ...

## уңған ҡатын булырға өйрәндем

**Бөрйән районы Ҡолғана ауылы оло юлдан алыҫта, урман-тауҙар араһында урынлашҡан төпкөл ауылдарҙың береһе. Төпкөл булыуына ҡарамаҫтан, ауыл йылдан-йыл йәшәрә генә: яңы йорттар ҡалҡып сыға, йәш ғаиләләр, яңы тыуған сабыйҙар һаны арта. Ауылдың төпкөллөгөнән ҡурҡмай, ошонда килен булып төшөп, бынамын тигән ғаилә ҡорған, улдар-ҡыҙҙар тәрбиәләгән уңған еңгәйҙәр, килендәр бихисап бында. Күптән түгел ана шундай еңгәйҙәрҙең береһе, уңған хужабикә, бәхетле ҡатын һәм әсәй Айгөл АЙЫТБАЕВА менән ғаилә, тәрбиә, аш-һыу тураһында бер аҙ әңгәмәләшеп алырға тура килгәйне. Һүҙҙе уның үҙенә бирәйек:**

### Дәүләт булған ергә мал эйәләй...

Ғаиләлә өс ҡыҙ һәм өс малай үҫтек. Әлеге ваҡытта барыбыҙҙың да матур тормош көтөүе әсәйемдең матур тәрбиәһенән килә. Ул үҙе бик егәрле, булдыҡлы, бер урында тик ултырып сыҙамаған, ваҡытын бушҡа уҙғармай, һәр ваҡыт үҙенә ниндәйҙер шөғөл табып, шунан йыуаныс ала торған ҡатын. Ҡыҙҙарын да үҙе белгән бөтә һөнәрҙәргә: һалма йәйергә, икмәк бешерергә, һөт ризыҡтары әҙерләргә, ҡул эштәренә өйрәтте. Әсәйем тураһында һүҙ сыҡһа, уны белгән кешеләр: "Бигерәк ихлас кеше инде", - тип телгә ала. Ысынлап та, уның ихласлығы йөҙөнә сыҡҡан шул. Район үҙәгендә йәшәгәнгә күрә, өйөбөҙҙән кеше өҙөлмәне, тиһәм дә була: яҡын-тирәләге ауылдарҙан район үҙәгенә йомошо менән килгән бөтә таныштар ҙа беҙҙә туҡтай торғайны. Әсәйем һәр килгән кешегә асыҡ йөҙ, яҡты сырай күрһәтә, бер ҡасан да уным юҡ, быным юҡ, тип тормай, килгән береһен өҫтәл түренә ултыртып һыйлай, булған ризығын өҫтәлгә сығарып теҙеп ҡуя. Беҙгә лә шулай итергә, йортҡа килгән кешене сәйһеҙ сығармаҫҡа өйрәтте. "Кеше булғанын ашай, булмағанын һорамай, бының менән бер нәмәгеҙ ҙә кәмемәҫ", - тиер ине. Кейәүгә сыҡҡансы уҡ әле бер көн әсәйемдән: "Кеше бигерәк күп килә, әсәй, ялҡып китмәйһеңме ул?" - тип һорап ҡуйғайным. Шул саҡта әсәйем: "Дәүләт булған ергә мал эйәләй, ризыҡ булған ергә кеше эйәләй", - тип яуап бирҙе. Ысынлап та, ашаған саҡта ҡулдар ни тиклем күберәк булһа, ризыҡ та шул тиклем тәмлерәк, бәрәкәтлерәк була шул. Шуға күрә үҙем дә әсәйемдән өлгө алып, самауырымды бер ҡасан да һыуытмаҫҡа, йортобоҙға ингән һәр кешене сәй менән һыйлап сығарырға тырышам. Шундай ихласлыҡҡа өйрәткәне өсөн әсәйемә рәхмәт белдерәм.

### Ҡатын кеше ҡамыр менән ҡартая

Ауыл ерендә йәшәүе ауыр, эш юҡ, аҡса юҡ, тип зарланырға ярата ҡайһы бер замандаштарыбыҙ. Мин уларҙың фекере менән риза түгелмен. Зарланырға яратҡан кешегә ҡайҙа ла бер үк тормош булыр: шулай уҡ ҡалала иң яҡшы шарттарҙа йәшәһә лә ундай кеше зарланыуын дауам итер ине. Кеше үҙенең торған ерен күркәмләргә, тапҡанынан бәрәкәт табырға, булғанынан риза булырға, шөкөр итергә һәм шуға өйрәнергә тейеш.

Ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы - өйҙө таҙа, йыйнаҡ итеп тотоу, ашарға әҙерләү бит инде ул. Ҡатын кеше ҡамыр менән ҡартая, бала менән һарғая, тигәндәр бит шуның өсөн дә. Тәмле итеп ашарға бешереү - ҡатын-ҡыҙҙың төп вазифаһылыр, тип һанайым. Яҡындарымды тәмле итеп һыйларға яратам. Ашарға бер ваҡытта ла магазиндан әҙер ризыҡтар һатып алмайым, бөтә нәмәне лә үҙ ҡулдарым менән әҙерләйем. Миңә лә күп ҡатын-ҡыҙҙар кеүек ғаиләмә иртәнгелеккә, төшкөлөккә, кискелеккә нимә әҙерләргә, тип көн һайын баш ватырға тура килә. Аҙыҡты көн һайын

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# ДАУАҢ ЭРГӘҢДӘ ГЕНӘ

## Мәҫәлән, һоло ярмаһы бутҡаһы...

**Табиптар организмдың төрлө ағзаларын һауыҡтырыусы ябай, кеҫәгә һуҡмаған һәм тәмле продукттарҙың исемлеген атаған.**

**Ноҡот борсағы.** Күҙәнәк һәм аҡһым сығанағы. Ҡандағы шәкәр күләмен күҙәтергә ярҙам итә (йәғни туҡ булыу тойғоһон тыуҙыра һәм буй-һын өсөн ҡурҡыныс түгел), шул уҡ ваҡытта "насар" холестеринды түбәнәйтә. Төрлөсә ҡулланырға мөмкин: бешерелгән, консерваланған килеш, ашта, гарнир итеп.

**Йәшел сәй.** Кофе кеүек кәйефте күтәрә, бактерияларға һәм тромбоциттарға ҡаршы һөҙөмтәле сара булыуы менән дә “маҡтана” ала. Иммун системаһын активлаштыра, теш эмален буямай, хатта кариесты профилактикалай.

**Майлы балыҡ.** Балыҡ майында булған Омега-3 кислоталары инфаркттан һәм тамырҙарҙың тығылыуынан һаҡлай. Әммә иҫегеҙҙән сығармағыҙ: иң яҡшыһы, быуҙа бешерелгән йәки нык тоҙланмаған консерва балығын ашарға кәрәк. Майҙа ҡыҙҙырылған, тоҙланған йәки киптерелгән балыҡтың файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк.

**Петрушка.** Ауыҙҙағы насар еҫте һәм тәмде бөтөрөүҙә теләһә ниндәй һағыҙҙан яҡшыраҡ. Бынан тыш, С витаминына бай. Ә был витамин иммунитетты нығыта һәм ҡартайыу процесына ҡаршы көрәшә.

**Алма.** Айырым сорттары 150 туҡлыҡлы матдәгә эйә, улар араһында вирустан, шәкәр сиренән, хатта яман шештән һаҡлағандары ла бар. Бынан тыш, алмала күҙәнәк күп. Ә ҡайһы бер диетологтар көнөнә ике алма ашау көн дауамында тупланған калорияны 20 процентҡа кәметә ала, тип раҫлай. Тик бының өсөн уның ҡабығын әрсергә ярамай: тап ҡабығында иң шәп антиоксиданттар һәм файҙалы нутриенттар бар.

**Грейпфрут.** Ҡандағы шәкәр күләмен бер аҙ кәметә һәм тиҙ туйыу тойғоһона килтерә. Шулай уҡ холестеринды кәметеүсе һәм ҡан тамырҙарында "бляшкалар" барлыҡҡа килеүенә кәртә ҡуйыусы кислотаға бай.

**Помидорҙар.** Был емешкә төҫ биреүсе ликопин простата ауырыуҙарын профилактикалау өсөн файҙалы. Унан яһалған барлыҡ аҙыҡ-түлек тә, томат пастаһы, төрлө соустар һәм һуттар ҙа шундай уҡ үҙенсәлеккә эйә.

**Гранат.** Гранат ҡулланыу, уның һутын эсеү йөрәк-ҡан тамырҙары системаһының холестерин менән бысраныуына юл ҡуймай. Әммә шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: гранат һуты эс ҡатыуға килтерә.

**Йәш картуф.** Өлгөргән бүлбегә ҡарағанда "тиҙ" түгел, ә "яй" углеводтарға эйә, тимәк, ашағандан һуң энергия организмығыҙҙан яйлап сығасаҡ. Шуға күрә оҙаҡ ваҡыт туҡ йөрөрһөгөҙ, буй-һынығыҙ ҙа боҙолмаҫ.

**Һоло ярмаһы.** Бик оҙаҡҡа асығыу тойғоһон баҫыр, күҙәнәк күләме юғары булыуы иҫәбенә эсәктәрегеҙгә "күнекмә" эшләтер, холестеринды кәметер. Тышҡы ҡиәфәт өсөн дә файҙалы: артыҡ өҫтәмәләре юҡ, һимертмәй, ә составына ингән кремний тирегеҙҙе яҡшыртыр.

***✓ Килен булып төшкәндең тәүге көнөнән ҡәйнәм мине үҙ ҡыҙындай күреп ҡабул итте. Ул киң күңелле, изге йөрәкле кеше булды. Ҡәйнәм менән бергә йәшәгәнемә бик ҡыуанам, мин унан ҙур тормош тәжрибәһенә өйрәндем.***

төрләләндерергә тырышам, бер үк аҙыҡ ялҡытып китә бит. Тормош иптәшем Камил да, улдарыбыҙ Йәмил менән Данил да бешергән ризыҡтарымды яратып ашай. Улар бигерәк тә итле ризыҡ ярата, шуға күрә билмән, манты һәм кәтлитте йыш әҙерләргә тырышам. Шулай уҡ ҡамыр аштарын, бигерәк тә төрлө эслек һалынып бешерелгән бәлештәр, ҡоймаҡ, йыуасаны яраталар. Улар яратып, тәмләп ашаһа, минең дә күңелем була. Тағы ла, төрләләндереп бешерергә тырышам, яңынан-яңы ысулдарын өйрәнәм. Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: күңел йылылығы, ихласлыҡ ҡушып бешергәндә, һәр ризыҡ та тәмле килеп сыға.

Кешегә күстәнәс һалғанда ла үҙем бешергән, эшләгән ризыҡтарҙы һалырға, шулай уҡ бүләккә лә үҙемдең бәйләмдәремде бирергә яратам. Үҙенә лә, алған кешегә лә күңелле. Замана әйберҙәре ни тиклем затлы һәм матур булһа ла, барыбер үҙ ҡулдарың менән эшләгән бүләккә етмәйҙер, тип һанайым.

Йыл һайын баҡса тултырып йәшелсә, емеш-еләк сәсәбеҙ. Йәй буйы баҡсанан сыҡмайбыҙ, тиһәм дә була - быны баҡса үҫтергән һәр кем аңлайҙыр. Үҙ ҡулдарыбыҙ менән үҫтергән ризыҡтарҙы йәй буйы ашап кинәнәбеҙ, ҡышҡылыҡҡа ла һаҡлайым, төрлө салаттар, ҡайнатмалар әҙерләйем. Шулай уҡ һөт ризыҡтарынан да ҡышҡылыҡҡа йыл һайын май, ҡорот, аҡ һәм ҡыҙыл эремсектәр әҙерләйем.

Ҡатын-ҡыҙ булған йорт бөхтә, таҙа, күркәм булырға тейештер. Мин гөлдәр, сәскәләр яратам, йортобоҙҙо йәшелләккә, гөл-сәскәгә күмергә тырышам. Өйҙә күберәк сәскәле гөлдәр үҫтерәм, сөнки улар йортто тағы ла йәмләрәк итә. Өй алды баҡсаһын георгин, пион, лилиә сәскәләре уратып алған. Лилиәләр - ҡәйнәмдең иҫтәлеге. Башҡаларҙа матур сәскәләр йәки гөлдәр күрһәм, алып ҡайтып ултыртам, үрсетәм. Шулай уҡ үҙемдең сәскәләремде лә күрше-күләнгә таратам. Был ауылға килен булып төшкән саҡта баҡсаларҙа гел бер төрлө генә сәскәләр була торғайны. Хәҙер баҡсалар матурайҙы, һәр хужабикә төрләләп ят-ят сәскәләр үҫтерә.

Мин бер үҙем генә был тиклем баҡсаны тәрбиәләп өлгөрмәҫ инем. Тормош иптәшем менән малайҙарым һыу ташырға, һыу һибешергә, ҡый уташырға ярҙам итә. Сәскәләрҙе, әлбиттә, үҙем тәрбиәләйем. Юғиһә, улар шул тиклем наҙлы, нескә, уларға айырым ҡараш кәрәк.

### Ҡәйнәмә рәхмәтлемен

Ҡәйнә менән килен мөнәсәбәттәре тураһында гәзит-журналдарҙа ғибрәттәр ҙә, ҡыҙыҡтар ҙа күп баҫылып тора. Ҡайһы саҡ хатта булмаҫтайҙы яҙалар кеүек тойолоп китә. Миңә лә ҡәйнәм менән бер йортта йәшәргә насип булды. Беҙ уның менән 14 йыл бер йортта татыу донъя көттөк. Быйыл туҡһанынсы тиҫтәһен тултырырға йыйынғанында ул яҡты донъя менән хушлашты. Ауыр тупрағы еңел булһын! Килен булып төшкәндең тәүге көнөнән ҡәйнәм мине үҙ ҡыҙындай күреп ҡабул итте. Ул киң күңелле, изге йөрәкле кеше булды. Ҡәйнәм менән бергә йәшәгәнемә бик ҡыуанам, мин унан ҙур тормош тәжрибәһенә өйрәндем. Мин кәңәште лә әсәйемдән түгел, гел ҡәйнәмдән һорай торғайным. Ауыр тормош юлы үткән кеше булараҡ, уның һәр һорауыма яуабы, һәр ауырлыҡтан сығырға сараһы табыла торғайны. Ниндәйҙер эшкә тотонор алдынан иң беренсе уның әйткән һүҙҙәренә ҡолаҡ һала, кәңәштәренә таяна инем. Әле лә ниндәйҙер хәл килеп тыуа ҡалһа, был осраҡта ҡәйнәм ни тиер ине икән, тип уйланып, уныңса эшләргә тырышам. Шул саҡта нисектер эштәрем дә ыңғай хәл ителгәндәй тойола.

Ҡәйнәм аш-һыуға оҫта булды, уның бешергән ризыҡтары телде йотторлоҡ була торғайны. Килгән һәр кеше уның икмәген, йыуасаһын тәмләп-тәмләп ашар ине. Мин дә килен булып төшкәс тә иң беренсе уныңса икмәк менән сәк-сәк бешерергә өйрәндем.

Ҡәйнәм аш-һыу бешергәндә үҙенең аҡыллы кәңәштәрен дә бирер ине, Мәҫәлән: "Һурпаң көлөп торһон, бының өсөн ашты көслө утта ҡайнатырға ярамай, тәме бөтә һәм ите ҡайнап сыҡҡас та туртаһын һөҙөп алһаң, аш ашауға күңелле була"- ти. "Йыуасаң ауыҙҙа иреп торһон, йомшаҡ, татлы, тәмле булһын, ҡаты-ҡото булмаһын", - тип тә өйрәтә. Шулай уҡ "Һауыт-һабаны төнгөләккә йыуымайынса ҡалдырмағыҙ, һыуҙы ябып йөрөгөҙ, өҫтәлдәге ризыҡты ла ябып йөрөгөҙ", - тигәне лә күңелгә ныҡ һеңеп ҡалған. Беҙ, йәштәр, ололарҙың ошондайыраҡ кәңәшенә ни өсөндөр көлөңкөрәп ҡарайбыҙ шул. Ә үҙебеҙ олораҡ йәшкә етә башлаһаҡ, барыбер шул өлкәндәрҙән ишеткән кәңәштәрҙе йәштәргә һөйләй башлайбыҙ. Үҙемдән алып әйтәм: әсәйем менән ҡәйнәмдең кәңәштәренең мәғәнәһенә үҙем дә яңы тәрәндән төшөнә башланым.

Гәзит уҡыусыларға ҡәйнәмдең икмәк бешереү рецебын тәҡдим итәм. Эше оҙағыраҡ булһа ла, матур итеп күбеп бешә, ҡатмай, телде йотторлоҡ тәмле була. Бының өсөн **2 ҡалаҡ ондо эҫе һыу менән бешереп алырға һәм уға 2 ҡалаҡ ҡомалаҡ сүпрәһе һалып әсетергә. 3 сәғәттән һуң кәрәгенсә һыу ҡойоп (4 табаға 2 литр), он һалып, ҡабаттан әсетергә. Әсеп сыҡҡандан һуң кәрәгенсә он һалып баҫырға. Ҡалҡып сыҡҡас, табаларға бүлеп һалып, мейестә (духовкала) 1 сәғәт бешереп алырға кәрәк.**

**Шулай итеп...**

**Уларҙың йортона ингән һәр кем соланда киптерергә эленгән төрлө дарыу үләндәренә һәм өй эсен биҙәгән төрлө ҡул эштәренә иғтибар итмәй ҡалмаҫ. Был да нәҡ ҡатын-ҡыҙҙың булдыҡлылығы, эшһөйәрлеге, оҫта ҡуллы булыуы тураһында һөйләй. Ни тиһәң дә, ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы, донъя биҙәге, өй йылыһын һаҡлаусы шул...**

**Нәзирә АЙЫТОВА**
**яҙып алды.**



**Бешерелгән йомортҡалар.** Йомортҡала булған лецитин беҙҙең организмға килеп эләгеп, мейе эшмәкәрлегендә ҡатнашыусы һәм хәтерҙе яҡшыртыусы холинға әйерелә. Бынан тыш, туҡлыҡлы һәм аҙ калориялы аҙыҡ (бер тауыҡ йомортҡаһында 70-80 килокалория).

**Йәшел борсаҡ.** Күҙәнәктән тыш, уның составында иммунитетҡа ярҙам итеүсе С һәм нерв системаһының сәләмәтлеген тәьмин итеүсе В витамины бар.

**Ҡара слива.** Был емештә табылған ферул кислотаһы эсәктәр өсөн файҙалы, был ағзаһың яман шешенә ҡаршы тора, ашҡаҙан-эсәк трактын сәләмәтләндереү сифатына эйә.

**Ҡара шоколад.** 70 проценттан ашыу какао борсағы булыуы антиоксиданттарҙың күплеген тәьмин итә һәм тамырҙарҙың бысраныуынан һәм тиҙ ҡартайыуҙан һаҡлай.

**Туңдырылған еләктәр.** Туңдырылған аҙыҡ-түлектең файҙаһын түбән баһаларға ярамай. Консервалау һәм бешереүгә ҡарағанда, һаҡлауҙың был ысулы файҙалы матдәләрҙе максималь рәүештә һаҡлай, тимәк, һеҙ ҡыш көнө витаминдар һәм антиоксиданттар ала алаһығыҙ.

**Зәйтүн.** Йөрәк һәм ҡан тамырҙарының сәләмәтлеге өсөн кәрәк булған барлыҡ төп компоненттарға эйә - бик ҡуйы булмаған майҙар, фенол сайыры, Е витамины.

**Миндаль.** Майлы һәм шәрбәт аҙыҡ ашап тамаҡ ялғап алыуҙы сәләмәтерәк вариантҡа алмаштыра. Миндаль сәтләүектәре тәмле, тиҙ һәм оҙаҡҡа асығыу тойғоһон баҫа, шулай уҡ ҡандағы "насар" холестерин кимәлен кәметә.

**Чили боросо.** Матдәләр алмашыныуын тиҙләтеүе менән артыҡ ауырлыҡтан арынырға ярҙам итә. Төшкө ашығыҙға ошо борос ҡушылған соус өҫтәгеҙ һәм бер нисә сәғәт эсендә калорияларҙың кәмеүе 15 процентҡа артыр.

**Тарттырылмаған иген макарондары.** Эре тартылған ондан эшләнгән ризыҡ юғары сортлы ондан эшләнгән аҙыҡ-түлектән файҙалыраҡ. Улар "яй" углеводтарға эйә, тимәк, тиҙ туйҙыра, энергия бирә һәм буй-һынға зыян итмәй.

**Куркума.** Был тәмләткестең компоненттарының береһе елһенеүгә ҡаршы көслө тәьҫиргә эйә һәм эсәк яман шешө үҫеүен туҡтата. Ҡош ите менән бик яҡшы үҙләштерелә.

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ишектәрҙе асыусы ике күнегеү

### 1-се күнегеү.

**Беренсеһендә күнегеүҙәрҙе ҡулдарығыҙ менән эшләргә тура киләсәк. Инструкцияны ике тапҡыр уҡып сығығыҙ һәм башлағыҙ.**

Тура баҫығыҙ, ҡулдарығыҙҙы алға һуҙығыҙ, улар ус менән иҙәнгә параллель булһын. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Уң яҡ беләгегеҙгә ауыр, көнкүреш тауарҙары, аҙыҡ-түлек менән тулған сумка аҫылған тип күҙ алдына килтерегеҙ. Ул шул тиклем ауыр, саҡ күтәреп тораһығыҙ. Хәҙер һул яҡ беләгегеҙгә шар бәйләнгән тип күҙ алдына килтерегеҙ, ул һеҙҙе өҫкә тарта. Был уйҙағы картиналарҙы ысынбарлыҡта тип уйлағыҙ. Бер нисә секундтан күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Инструкцияны тағы бер тапҡыр уҡығыҙ. Әҙерһегеҙме? Улайһа, күнегеүҙе тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Күҙҙәрегеҙҙе йомғанда ҡулдарығыҙ бер кимәлдә ине. Хәҙер уң ҡулығыҙ һулынан түбәнерәккә төшкән. Ни өсөн?

### 2-се күнегеү.

**Икенсе күнегеүҙе ултырып эшләргә кәрәк. Инструкцияны ике тапҡыр уҡып, уны үтәгеҙ.**

Башығыҙҙы мөмкин булған тиклем, артыҡ көс түкмәй генә, бора алғансы тиклем һулға бороғоҙ һәм ҡайҙа тиклем боролғанын иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм башығыҙҙы тағы ла арыраҡ бора алам тип күҙаллағыҙ. Күҙегеҙҙе асығыҙ һәм башығыҙҙы ҡабат һулға бороғоҙ.

Инструкцияны тағы бер ҡат уҡып сығығыҙ. Күнегеүҙе ҡабатлағыҙ.

Башығыҙҙы икенсе тапҡыр борғанда ул тәүгеһенә ҡарағанда артҡараҡ киттеме? Ни өсөн?

Ошо ике "Ни өсөн?"гә яуап - һеҙҙең аңығыҙ тәнегеҙ менән идара итә.

Бының нимә аңлатҡанын аңлайһығыҙмы?

Яңы кеше өсөн был, үҙегеҙгә насар булһын өсөн бөтә нәмәне лә эшләй алаһығыҙ йәки үҙегеҙгә яҡшы булһын өсөн бөтә нәмәне лә эшләй алаһығыҙ, тигәнде аңлата. Йәғни һәр уйланған эшегеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн һеҙ үҙегеҙҙә тейешле энергияны таба алаһығыҙ. Быға тиклем ышанмаған һәләткә һәм ғәҙәткә эйә була алаһығыҙ.

Киләһе этапта фән беҙҙең аңыбыҙҙың бер-береһе менән бәйләнгәнлеген асыҡлауын белерһегеҙ. Бындай күҙаллау - ысын мәғәнәһендә сифатлы алға һикереү ул.

Был нимә аңлата, беләһегеҙме?

Ниһайәт, ошо юлдарҙы уҡып, уйҙың ижади энергияны тәшкил итеүен аңларһығыҙ, ә энергия булып торған байлыҡ та уй ярҙамында булдырыла.

**Роберт СТОУН.**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ХӘЛИЛ ӘЛИШЕВ

**Хәлил Фәйзрахман улы Әлишев - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе, ҡаһарман сардар. 1892 йылда Ҡаҙан губернаһының (хәҙерге Татарстан Республикаһының Октябрьский районы) Иҫке Әлмәт ауылында тыуған. Революцияға тиклем Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, подпоручик званиеһын алып ҡайта.**

1918 йылдың йәйендә Хәлил Әлишев Башҡорт армияһы сафтарына алына. 23 август Башҡорт хәрби шураһы уны Туҡ-Соран кантонының ирекле отрядына етәксе итеп тәғәйенләй. 1918 йылдың 7 октябрендә Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу һәм Туҡ-Соран кантондарындағы ирекле башҡорт отрядтары, йәғни Башҡортостандың көньяғындағы отрядтар бергә тупланып, 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкы ойошторопа. Полктың командиры итеп Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге мөдире Әхмәҙулла Бейешев тәғәйенләнә. Ә Хәлил Әлишев үҙе етәкләгән Туҡ-Соран отряды менән ошо полктың бишенсе эскадронын тәшкил итә.

1918 йылдың декабренән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем 2-се Башҡорт полкы составында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. Ошо мәлдә Х. Әлишев үҙен ҡыйыу, оҫта һәм тәүәккәл сардар итеп таныта. Ғинуар айында Башҡорт корпусы командующийы Зәки Вәлиди уны Стәрлетамаҡ фронтындағы башҡорт отрядтарының командиры итеп тәғәйенләй. Поручик Әлишев командалығындағы башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 ғинуарында Нуҡай ауылында (ул ауыл хәҙерге Күгәрсен районына ҡарай) ҡыҙылдарҙың тулы бер полкын ҡыйрата. Был хәрби уңыш тураһында ул шул уҡ көндә баш сардар Зәки Вәлидигә хәбәр итә.

"По сведениям разведки, бежавшие красные из Нукаевой настолько были напуганы, что даже не останавливались в Красной мечети, а поехали прямо на Тляумбетово. Теперь высылаю в Красную мечеть пол эскадрона для несения сторожевой службы, а завтра, 19 января отправляюсь со штабом и с силами в Красную мечеть. В числе трофеев имеется канцелярия 1-го Восточного Кавалерийского полка с 2-мя пишущими машинами".

Нуҡай ауылындағы алышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн 21 ғинуар көнө Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы үҙенең фарманы менән 13 офицерға яңы звание бирә, шул иҫәптән поручик Әлишев штабс-ротмистр дәрәжәһенә лайыҡ була. Артабан ул Ә. Бейеш урынына 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң Саранск ҡалаһында башҡорт полктарынан Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторопа. Хәлил Әлишев бригаданың 2-се Башҡорт кавалерия полкын етәкләй. Башҡорт бригадаһы составында ул 1919 йылдың июнь-сентябрь айҙарында Көньяҡ фронтта (Украинала) Деникин армияһына ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Дошман менән алыштарҙың береһендә 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, эргәһенә снаряд төшөп, көслө контузия ала. Уны иҫһеҙ көйөнсә яу яланынан алып сығалар.

Ҡанлы алыштар һөҙөмтәһендә башҡорт полктары, шул иҫәптән 2-се кавалерия полкы, ҙур юғалтыуҙар кисерә. 14-се армия командованиеһы дүрт башҡорт полкын ике йыйылма полкка (кавалерия һәм уҡсы полкына) берләштерергә ҡарар итә. 1919 йылдың сентябрендә Хәлил Әлишев 2-се полктың иҫән ҡалған командалыҡ составы һәм штабы менән Петроградҡа килә. Зәки Вәлиди ҡаһарман сардарҙы Бәләбәйҙән килгән яңы 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй. Хәрби эштәр буйынса комиссарҙың фарманында былай тиелә: "Командир 3-го Башкирского Кавалерийского Советского полка **Галамеев** назначается в распоряжение Начальника Отдельной Башкирской Кавалерийской Советской дивизии. На должность названного полка назначается командир бывшего Башкирского Кавалерийского Советского полка тов. **Алишев**.

Тов. **Алишеву** прибывших вместе с ним в Петроград командный и прочий состав бывшего 2-го Башкирского Кавалерийского Советского полка: имущество, обоз, канцелярские принадлежности и прочее немедленно отправить в Стерлитамак в распоряжение Башвоенкома, откуда получат дальнейшее направление во 2-й Башкирский Кавалерийский Советский полк бригады Муртазина".

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта торған сағында артабанғы формирование үтә, полктар һалдаттар, комсостав менән тулыландырыла, яңы килгән һалдаттар һуғышҡа әҙерлек үтә. Октябрь уртаһына Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы ҡыйратып, Петроград ҡалаһы янына килеп етә. Юденич армияһына ҡаршы башҡорт ғәскәрҙәре ебәрелә. Ошо айҡанлы Хәлил Әлишевҡа тағы бер яуаплы бурыс йөкмәтелә:

"16-го октября 1919 года согласно словесного приказания Начальника Отдельной Кавалерийской Башкирской дивизии тов. АХЛОВА и согласно удостоверения Коменданта Петрукрайона тов. АВРОВА от 15-го октября сего года за № 343, я был назначен Начальником Башкирской группы. В состав этой группы входил 3-й Кавалерийский Башкирский полк в составе: 2-х пеших - 360 штыков и 2-х конных эскадронов в числе 240 сабель. Командир полка тов. КАПЛАН, Политком тов. Абдрашитов и 3-й батальон 3-го стрелкового Башкирского полка в составе 575 штыков, командиром батальона тов. АБДЕЕВ и Политком тов. БУЛЯКОВ.

Для управления этой группой мною был сформирован Штаб группы: Начальником Штаба этой группы тов. КАЛЬМЕТЕВ, для поручений тов. ТЕРЕГУЛОВ и помощник Начальника Штаба тов. СМИРНОВ и политкомом был тов. АГИШЕВ", - тип яҙа үҙенең докладында Әлишев.

1919 йылдың октябренән 1920 йылдың ноябренә тиклем Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө Юденич ғәскәрҙәрен ҡыйратыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт яугирҙары ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре фронттың төп участкаһы - Пулков ҡалҡыулығында урынлаша. "Пулковские высоты по своему геогрaфическому положению составляли самый важный стратегический пункт, имеющий решающее значение в судьбе Петроградского фронта. Противник для занятия этого пункта сосредоточил большие свои надежные силы пехоты (офицерские батальоны), кавалерии и легкую, тяжелую артиллерию.

В течение нескольких дней продолжались ожесточенные бои за эти Пулковские высоты, башкиры в боях знающие только одно: умереть или победить - напрягли все силы и выказали неописуемый героизм. Удалые, храбрые, смелые, дружные натиски башкир заставляли противника, грозного генерала Юденича, отказаться от плана занять преддверие Петрограда - Пулковские высоты", - тиелә бер архив документында.

Хәлил Әлишев та башҡорт яугирҙарының батырлығын билдәләп үтә: "За все операции по защите города Петрограда, входящие в состав моей группы Башчасти (3-й Кав. Башполк и 3-й стр. Башполк) отличались своим геройством, мужеством, не один командир и красноармеец этих полков не имели мысли о сдаче Петрограда", - тип яҙа ул үҙенең докладында.

Совет хөкүмәте Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградты ҡурсалауҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтарын юғары баһалай. Байтаҡ һалдат һәм командирҙар, шул иҫәптән Хәлил Әлишев, РСФСР-ҙың юғары дәүләт наградаһы - Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1920 йылда Хәлил Әлишев Финляндия сигендә торған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән командалыҡ итә.

30-сы йылдар аҙағында Хәлил Фәйзрахман улы Ленинград ҡалаһында Сварочный техникумының военругы булып эшләй.

1937 йылдың 7 июнендә НКВД органдары тарафынан ҡулға алына. Ярты йыл төрмәлә ултырғандан һуң ул 1937 йылдың 8 декабрендә, НКВД Комиссия һәм СССР прокуратураһы ҡарары менән атыла.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

**Әйткәндәй, журналист Азат Ярмуллин үҙенең тарихи-публицистик материалдары өсөн БР Хөкүмәтенең Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына тәҡдим ителде. Премияға дәғүә итеүселәр араһында Мәләүеҙҙең "Көнгәк" гәзите журналисы Лена Абдрахманова, "Өмөт" йәштәр гәзитенән Эльвира Әсәҙуллина, "Кызыл таң" гәзитенән Фәниә Ғәбиҙуллина, языусы һәм журналистар Хәмит Иргәлин, Зөһрә Ҡотлогилдина, Рамазан Ҡотошов, "Китап" нәшриәтенән Динә Мырҙаҡаева, шулай уҡ журналистар Мадриь Ғафуров, Гөлсәсәк Ханнановалар исеме бар.**

АФАРИН!

**Һүҙем - яратҡан баҫмабыҙ "Көнгәк" гәзите һәм уның хәбәрселәре тураһында. Ғаиләбеҙ менән үҙ телебеҙҙә сыҡҡан ете республика гәзит-журналын алдырабыҙ. Почта килеү менән ҡулыма иң беренсе район гәзите "Көнгәк"те алам, унда район-ҡала яңылыҡтары, таныш кешеләр, яҡташтар тураһында фәһемле мәҡәләләр, шиғыр-хикәйәләр баҫыла. Дүрт битлек гәзиттә күпме мәғлүмәт һыйғанына һоҡланам, уны башынан аҙағынаса киңәнеп уҡыйым. Ошо яҡтан ҡарағанда, беҙ ысын мәғәнәһендә үҙ гәзитебеҙ менән ғорурланырға хаҡлы. Хәбәрселәр төрлө тематика-ваҡиғаны оҫта яҡтырта, шунлыҡтан, "гәзит - уҡыусы - гәзит" бәйләнеше өҙөлмәй, үҫешә, нығый.**

# АЛТЫН БӨРТӨКЛӘП...

"Көнгәк" гәзите сыға башлағандан бирле уға тоғролоҡ һаҡлаған, әхлаҡ, тәрбиә темаларына яҙған мәҡәләләре менән уҡыусылар араһында танылыу яулаған хәбәрсе Лена Абдрахманованың иждадын даими күҙәтеп барабыҙ. Быйыл ул тарих, этнография, фольклор менән ҡыҙыҡһыныусы яҡташтарыбыҙға тағы бер оло бүләк әҙерләне. Йыл дауамында уның "Нисек йәшәйһең, башҡорт ауылы?" рубрикаһы аҫтында сыҡҡан мәҡәләләре күптәр өсөн асыш табыш булды. "Нисек йәшәйһең, башҡорт ауылы?" хатта үҙ теленә битараф булғандарҙы ла ҡуҙғатты, уйланырға, киләсәген күҙалларға мәжбүр итте, бәхәс майҙаны асты. Ысынлап та, ошоға тиклем районды башҡорт ауылдары тураһында ентекләп бер кемдең дә яҙғаны булманы. Автор уларҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәгенә байҡау яһай, ауылдың иң кесеһе һәм абруйлы аҡһаҡалы, ағинәйҙәрен исемләй, уныш-еңеүҙәре, шатлыҡ-ҡыуаныстары, проблемаларын асып һала. 34 ауыл тарихын йыйыу өсөн халыҡ менән осрашып һөйләшеү, танышыу, уларҙың күңел кисерештәре, тормошо уртаһына ҡайнап йөрөү күпме көс, ваҡыт, һаулыҡ, түҙемлек тә талап иткәндер. Лена Абдрахманова иҫ киткес изге, оло эш башҡарҙы, Арыҫлан ауыл биләмәһенә ҡараған Смаҡ, Яңауыл, Яҡтыкүл, Арыҫлан, Шәрип һәм башҡа ауылдар тарихы буйынса бай мәғлүмәт алған райондаштарым исеменән уға оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Мәләүеҙ районының "Көнгәк" гәзите редакцияһы Лена Абделбарый ҡыҙы Абдрахманованы ошо рубрика аҫтында баҫылған мәҡәләләре өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға тәҡдим итте. Беҙ ҙә уны хуплайбыҙ. "Алтын бөртөкләп йыйыла" тигәндәй, киләсәктә башҡорт ауылдары тарихы бер йыйынтыҡ булып, беҙҙең балаларыбыҙға бай мәғлүмәт булып тапшырылһын, тигән теләктә ҡалабыҙ.

**Гөлсөм ХИСАМЕТДИНОВА,**
**БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
**Мәләүез районы.**

КЕМ АЛЫҠ?



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 октябрь** иждад миҙгеленә арналған "Илһам артынан сәйәхәт" тип аталған ҙур концерт була. Унда Фәдис Ғәниев, Әлфиә Юлсурина, Римма Амангилдина, Әлиә Нурғәлиева, Рушан Биктимеров, Венера Рәхмәтуллина, Юлиә Ғәбитова, Урал Мортазин, Заһир Иҫәнсурин, Марсель Котоев, "Далан", "Карауанһарай" төркөмдәре, һ.б. ҡатнаша.

Матурлыҡҡа, бөйөклөккә, рухиәткә ҡоролған йырмоң, бейеү майҙанына рәхим итегеҙ!

Түбәндәге викторина һорауҙарына дөрөҫ яуап ҡайтарыусыны ошо иждад миҙгелен асыу тантанаһына саҡырыу ҡағыҙы көтә.

1. Быйыл Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы нисәнсе иждад миҙгелен аса?
2. Филармонияға нисәнсе йылда композитор Хөсәйен Әхмәтов исеме бирелде (айы, йылы)?
3. Бөгөнгө көндә филармонияны кем етәкләй?

**Тел.: 89279688814**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ГИМНЫБЫҘ ҒОРУР ЯҢҒЫРАЙ

**Һис һүҙһеҙ, ошо үткән егерме йыл эсендәге иң әһәмиәтле ҡаҙаныш - дәүләт гимны, гербы һәм флагы. Улар -республикабыҙ символдары булып тора. Ә символдар үҙе үк халыҡтың уникаль рухи ҡаҙанышы. Республикабыҙҙың дәүләт гимнының музыкаһы күптән яҙылған булһа ла, һүҙҙәре ике йыл элек кенә ҡабул ителде. Беҙҙең флагыбыҙҙы һәм гербыбыҙҙы һәр ерҙә лә күрергә була, тик бына гимнға әллә ни әһәмиәт биреп еткермәйбеҙ. Шуға күрә мин республикабыҙҙың дәүләт гимны һәр мәктәптә, балалар баҡсаһында өйрәнелһен ине, тип теләйем. Гимндың һүҙҙәрен яҙыусыларҙың береһе Рауил Бикбаев: "Башҡортостан гимны - ул беҙҙең Конституциябыҙҙың квинтэссенцияһы булып тора", - тип әйткәйне. Йәғни, бөтөн Конституция закондары заманға ярашлы яҙылған булһа, беҙҙең гимн һүҙҙәрендә Конституцияның рухи сағылышы ғына түгел, ә булмышыбыҙ, тарихыбыҙ ҙа сағылған. Беҙҙең гимныбыҙ шул тиклем мөһабәт, ғорур яңғырай. Беҙҙең гимныбыҙ дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә әйҙәй. Шулай тыныс, дуҫ йәшәүебеҙҙә гимныбыҙҙың да өлөшө барҙыр, тип уйлайым.**



Гимныбыҙ юлаевсыларҙы ла еңеүгә дәртләндерә.

Гимндың көйөн мин бер төн эсендә яҙһам да (1990, 11 октябрь), ул мөндо мин айҙар, йылдар буйы күңелемдә тыуҙыра килдем. Был көйгә мин республикама, тыуған илемә, халҡыма, милләтемә булған мөхәббәтемде һалырға тырыштым.

Флагыбыҙҙа сағылған ҡурай тураһында гимнда шундай һүҙҙәр бар: "Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә һинең ғорур, рухлы байрағың..." Ҡурайыбыҙ нурҙар ҙа, моңдар ҙа сәсеп торһон, тигән теләктәр һалынған был һүҙҙәрҙә. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың ирекка, азатлыҡҡа ынтылышы ла, изге теләге лә сағыла уның эстәлегендә.

Суверенитет яулау ул кемдәндер айырылып сығыу тигәнде аңлатмай. Гимнда: "Рәсәй менән бөйөк берҙәмлек", - тигән һүҙҙәр бар.

Үткән егерме йыл эсендә күп ҡаҙаныштарға өлгәштек. Миҫалға үҙем эшләгән өлкәне әйтеп үтер инем: төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашыуыбыҙ, республикабыҙҙың һәр районында мәҙәниәт һарайҙары асылыуы, үҙешмәкәр сәнғәттең үҫешеүе мәҙәниәтебеҙ кимәленең яңы баҫҡысҡа күтәрелеүен дәлилләүсе миҫалдар. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бер нисә тапҡыр "Алтын битлек" фестивалендә ҡатнашып, ҙур уңыш яуланы. Шулай уҡ "Туғанлыҡ" фестивалдәре үткәрелә башлауын да мин суверенитет емеше тип әйтер инем. Төрлө илдәр театрҙарының үҙ-ара аралашыуы бик яҡшы күренеш, улар тәжрибә уртаҡлаша, бер-береһенән өлгө лә ала. Халҡыбыҙ киләсәктә лә берҙәм булып, бәхетле йәшәһен ине.

**Фәрит ИҘРИСОВ,**

**Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны музыкаһы авторы.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "МЫЖЫҠ ЯҘМАЛАРЫ"

# "МЕНИК", "БЕЛИК", "ШУНДЫЙ"...

## Башҡорт теленең ҡайһы бер "үҙенсәлектәре" тураһында

Көн һайын радио тыңлайым һәм көн һайын тиерлек үҙем өсөн яңылыҡ табам. Был юлы - башҡорт телендә. Быға тиклем, белеүемсә, башҡортса "менәйек", "беләйек" тип һөйләшә торғайныҡ. Хәҙер, баҡтиһәң, "меник" һәм "белик" тип йырлайбыҙ икән. Ә тулыһынса ошолайыраҡ яңғырай - "Кәркәле тауҙары бейек, бейек булһа ла "меник", тыуған яҡтың, һөйгән йәрҙең, дуҫтарҙың ҡәҙерен "белик". Башҡарыусыһы - бар халыҡҡа билдәле хөрмәтле әртисебеҙ. Был йыр уның башҡарыуында йыш ҡына радио аша, сәхнәләрҙә яңғырай. Әллә йыраусы ағайыбыҙ башҡортса белмәйме? Юҡ, белә, әммә был йыр татар телендә яҙылған һәм уны башҡортса бер нисек тә йырлап булмай - көйҙөң ритмы боҙола, имеш. Әммә ул һүҙҙәрҙе көйөн һуҙа-һуҙа дөрөҫ әйтеп була. Мин үҙем йырлап ҡарағаным булды.

Шул уҡ хәл икенсе бер йыр менән ҡабатлана. Башҡарыусыһы - йәш булһа ла талантлы һәм бик өмөтлө йырсы. Һәйбәт кенә башлап ебәрә ул был көйҙө. Дәртле ритм күңелдәрҙе күтәреп ебәрә. Һәм, ниһайәт, ҡушымта килеп етә. Һәм... "Һинең менән шундый рәхәт миңә..." Бәлки, был берәй диалекттыр? Бәлки. Әммә әҙәби башҡорт телендә был һүҙ "А" хәрефе аша әйтелә һәм яҙыла. "Шундай", тип. Махсус рәүештә һүҙлектәрҙе ҡарап сыҡтым.

Радио-телевидениела ла, филармонияларҙа ла башҡарыусыларҙың йырҙарын тыңлап, баһалап, музыкаль яҡтан ғына түгел, ә һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен байҡап ултырған, кәрәк булһа, йырсыларға иҫкәрмә яһаған мөхәррирҙәр штаты булдырғанда шәп булыр ине ул...

**Мыжыҡ ТЫЗЫҠОВ.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

**Беҙ бәләкәй саҡта инәй тейешле кешебеҙ берәйһенә асыуы килһә "ҫиңмай" тип әрләй торғайны. Аҙаҡ бошонмаҫ кешегә шулай тип әйткәндәрен аңланым.**

# ЙОНСОТТОМО, ЙҮНКЕТТЕМЕ?

"Муйыныңа эт аҫһаң, ергә теймәҫ, эйелеп иҙән дә һепермәҫ "арамда", - тип әрләр ине күрше ҡыҙын.

Унан һуң инәйемдең "эт йүнкетте" тигән һүҙе бар ине. Был йонсотто тигән мәғәнәне аңлата. "Эт йүнкетте был Миңһажетдин, атын тышауламай ебәрә лә, балаларын этләтә эҙләтеп", тип әрләүе иҫтә ҡалған.

**Нурия ҠУҢЫСБАЕВА.**

**Ейәнсура районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЙҒЫНЫ ЯҢҒЫҘ КҮТӘРҺӘҢ,

## шатлыҡты икәү күтәрергә кәрәк

Мөхәббәттә ахмаҡлыҡ ҡылмаған кеше мөхәббәттә аҡыллы була алмаясаҡ.

**(Теодор Рейк).**

Ҡайғыны яңғыҙың да күтәреп була, ә шатлыҡ өсөн икәү булыу кәрәк.

**(Элберт Хаббард).**

Бысраҡ әйберенде өйҙә йыуыу яҡшыраҡ.

**(Мексика мәҡәле).**

Бөтөн кешелек аҡылы ике һүҙгә һыя: көтөү һәм өмөт итеү.

**(Александр Дюма-атай).**

Бөйөк ҡаҙаныштарға ынтылыусылар бөйөк ғазаптарҙы ла кисерергә тейеш.

**(Плутарх).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ кеше организмындағы йәшәү көстәре үҙ-ара бәхәсләшеп киткән һәм "Мин - иң яҡшыһы" тип ҡысҡырыша башлаған. Бәхәстең осона сыға алмағас, Аллаһыға килеп, уларҙың кемеһе иң яҡшы икәнен билдәләүҙе үтенгәндәр. Аллаһ: "Ҡайһығыҙ ташлап киткәндән һуң организм иң ҡыйын хәлдә ҡала, шул йәшәү көсө иң мөһиме була", - тигән. Иң тәүҙә Телмәр көсө организмды ташлап киткән. Бер йылдан яңынан ҡайтҡан һәм башҡаларҙан "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Һөйләшмәгән телһеҙҙәр, әммә һулыш алыусылар, күҙ менән күреүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Телмәр организмға ингәс, Күреү көсө организмдан киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Күҙе күрмәгән һуҡырҙар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Күреү көсө организмға ҡайтҡас, Ишетеү көсө киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Ишетмәгән һаңғырауҙар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Шунан Аҡыл организмды ташлап киткән. Бер йылдан кире ҡайтҡан һәм "Йә, минһеҙ нисек йәшәнегеҙ?" тип һораған. "Аҡылы булмаған балалар, әммә һулыш алыусылар, теле менән һөйләшеүселәр, ҡолаҡ менән ишетеүселәр нисек йәшәһә, шулай йәшәнек", тигән йәшәү көстәре. Аҡыл ҡайтҡас, организмды Һулыш көсө ташларға йыйынған. Ләкин ул организмдан китергә ҡуҙғалғас, башҡа йәшәү көстәре быулыға һәм Һулыш көсө артынан ҡутарылып сыға башлаған. Шунда улар дөйөм йорттары организмда иң мөһиме Һулыш көсө икәнен аңлаған һәм уға:"Һин - иң яҡшыһы. Беҙҙең батшабыҙ бул. Китмә!" тип, уның өҫтөнлөгөн танырға мәжбүр булған..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3934